ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 июнь (һөтай) 2018

№23 (805)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем һеҙ 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм теләгәндәр квитанцияларын редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармандованың "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"; "Башкиры" һәм башҡа матур китаптарға эйә була ала. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Улым, һиңә әйтәм...**



4

**Диалект лөғәте...**



телебеҙҙе байыта

7

**"Өфө-II" ҡаласығына - 1500 йыл**

Быны донъя тарихы ла таный



8-9

**Салауат исеме беҙҙә генә...**



11

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баш ҡаланың һәйкәлдәре һәм тарихи урындары тураһында һөйләгәндә беҙ иң тәүҙә 1500 йыллыҡ тарихи ҡомартҡы булған "Өфө-II" ҡаласығын телгә алырға тейеш түгелбеҙме?

***Гәүһәр БАТТАЛОВА, "Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ директоры:*** Ысынлап та, 1500 йылдан ашыу тарихы булған иң изге лә, ҡыҙыҡлы һәм шул уҡ ваҡытта серле лә "Өфө-II" ҡаласығы урыны, йәғни хәҙер "Боронғо Өфө" тип йөрөтөлгән музей-ҡурсаулыҡ биләмәһе йәше, ҡиммәте, әһәмиәте яғынан иң беренсе урында тора һәм баш ҡалабыҙҙың иҫтәлекле тарихи үҙәге булған Әхмәтзәки Вәлиди, Яңы күпер, Октябрь революцияһы урамдары менән Салауат Юлаев проспекты киҫелешендә урынлашҡан. "Өфө-II" ҡаласығының бар донъяға билдәлелек алыуы менән беҙ мөхтәрәм шәхесебеҙ - тарихсы ғалимыбыҙ Нияз ағай Мәжитовҡа бурыслыбыҙ. Бөтөн Көнсығыш Европала тиңе булмаған был уникаль ҡомартҡыны емертмәйенсә һаҡлап алып ҡалыу, уның быуаттарға һуҙылған тәрән тамырҙарын юллау һәм асылына ҡағылышлы хәҡиҡәтте иҫбатлау өсөн Нияз Абдулхаҡ улы көсөн дә, белеме һәм тәжрибәһен дә, хатта һаулығын да йәлләмәне. Тарихи хаҡлыҡты, үткән шанлы быуаттар шаһиты булған һәйкәлдәребеҙҙе ана шулай һаҡлау һәм яҡлау кәрәк ине лә, сөнки тарихыбыҙҙың сал боронғолоғон үҙҙәренә кәрәккәнсә "борғолау", емереү, юҡҡа сығарыу уйы менән янғандар ҙа юҡ түгел ине. Ана шундай ҡатмарлы көрәш этабына ла шаһит булырға тура килде "Боронғо Өфө" ҡаласығына. Ниһайәт, тарихи хәҡиҡәт еңеп, рәсми рәүештә танылыу яуланы һәм 2006 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан ҡомартҡыбыҙҙы һаҡлау, фәнни һәм археологик эҙләнеү эшмәкәрлеген артабан дауам итеү һәм үҫтереү маҡсатында "Өфө-II" ҡаласығы тигән дәүләт программаһы ҡабул ителде. Ул йылдарҙа ҡаласыҡты өйрәнеү эштәрен БДУ-ның археология экспедицияһы алып барһа, 2012 йылдан башлап "Өфө-II" ҡаласығын һаҡлау һәм артабан өйрәнеү бурысы беҙҙең "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығына йөкмәтелде. Уның даими ғәмәлдәге археологик экспедицияһы йыл һайын стационар археологик ҡаҙыныу эштәре менән мәшғүл. "Өфө-II" ҡаласығы биләмәләрендә һуңғы тиҫтә йыл эсендә барған ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә тупланған сенсацион табыштар уны уникаль тарихи һәйкәлдәр рәтенә индерҙе. Тикшеренеү эштәре алып барылған майҙанда тиҫтәнән ашыу хужалыҡ-көнкүреш комплекстары документаль нигеҙҙә раҫланды. Табылған артефакттар нигеҙендә белгестәр биләмәлә көршәк яһау һәм бронза ҡойоу оҫтаханалары булғанлығы хаҡында фекер йөрөтә. Керамик материалдар араһында иһә турбаслы һәм бахмутин мәҙәни төркөмдәр һәм романов-именьков керамикаһына ҡараған һауыт-һаба ярсыҡтары өҫтөнлөк итә; имәндәш, ҡара яҡуп, кушнарен, иртә булғар, сейәлек һауыт-һаба төркөмдәре өлгөләре лә осрай. Ҡаласыҡ материалдары араһында монголға тиклемге һәм Алтын Урҙа осорона (II мең йыллыҡтың тәүге яртыһы) ҡараған ҡомартҡылар ҙа бар. XVI быуат дирхемдары коллекцияһы (Джучи Улус аҡсалары хазинаһы) составында Үзбәк, Яныбәк, Бирҙебәк, Науруз, Мөрит хандар заманында сығарылған 19 көмөш тәңкә бар. Ҡаҙыныу-тикшеренеүҙәр ваҡытында табылған бик күп ювелир-биҙәнеү әйберҙәре, мунсаҡтар, сит илдәрҙән килтерелгән һауыт-һаба ошонда йәшәгән халыҡтың Хазар ҡағанаты һәм Урта Азия илдәре менән сауҙа бәйләнештәре хаҡында һөйләй.

Беҙҙең музей-ҡурсаулыҡ республиканың Мәҙәни ҡомартҡылар объекттарын һаҡлау буйынса дәүләт идаралығы менән берлектә "Боронғо Өфө" археологик паркы проектын төҙөү маҡсатында әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Киләсәктә "Боронғо Өфө" ҡаласығының квартал төҙөлөш өлөшө тарихи йәһәттән яңыртылып, ҡомартҡының мәҙәни ҡатламы консервацияланасаҡ, шулай уҡ ҡаласыҡтың эргә-тирәһен төҙөкләндереү ҡарала. Нисек кенә булмаһын, был ҡаласыҡ баш ҡаланың иң уникаль ҡомартҡыһы итеп баһаланырға хаҡлы.

(Дауамы 2-се биттә).




12+

✓ Ҡыҫҡаһы, Өфөнөң боронғолоғон һәм уның тап Башҡорт ҡалаһы булыуын раҫлаусы мәғлүмәттәр, документтар етерлек, тик уны Хөкүмәт кимәлендә махсус ҡарар менән нығытып ҡуйырға ғына кәрәк.



## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



**"Киске Өфө" гәзитен иң матур бер бүләк тип ҡабул итәм. Ысынлап та, әллә күпме кәрәкле мәғлүмәт тупланған был гәзит халҡыбыҙға бер бүләк ул.**

# "КИСКЕ ӨФӨ" УҠЫП...

## Өфө һулышын тоябыҙ

Минең тормошома ла ул баштан уҡ бүләк булып килеп инде. 2013 йылға матбуғат баҫмаларына яҙылыу кампанияһы бара ине. Ҡыҙым менән кейәүем килеп, яҡынлашып килгән яңы йыл менән ҡотлап, "Киске Өфө" гәзитенә квитанция бүләк итеп киттеләр. БДУ-ның Сибай институтында эшләп йөрөгән кейәүем: "Үҙен ысын башҡорт итеп иҫәпләгән кеше мотлаҡ "Киске Өфө"нө алдырып уҡырға тейеш, тип әйтә беҙҙә уҡытыусылар", - тине.

Тәүге һанынан уҡ оҡшаны бит был гәзит. Башҡорт рухы менән һуғарылған булыуы күңелгә майҙай яғылды. Нишләп алдараҡ белмәнем икән, тип уйлайым хәҙер. Шуға ла башҡаларға ла гәзит тураһында һөйләй йөрөйөм, белһендәр, уҡыһындар, зыялы булһындар, тип теләйем. Алты йыл эсендә бер һанын да, бер битен дә ҡалдырмай уҡып барам.

"Киске Өфө"нө милләтебеҙҙең рухи хазинаһы, халҡыбыҙҙы алға әйҙәүсе, уны күтәреүсе, тип йөрөтәм. Һәр мәҡәлә, һәр хәбәр урынлы һәм файҙалы, йәшәйешебеҙҙә бик кәрәкле. Әле бына район ағинәйҙәре менән милли кейемдәр, милли аш-һыуҙарыбыҙҙы тергеҙәбеҙ, ә был мәғлүмәтте байытыуҙа гәзитебеҙ ҙә ярҙамлаша. Халҡыбыҙҙың алдынғы фекерле шәхестәре менән әңгәмәләрҙең әһәмиәте тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Күңелде өйкәп торған һорауҙарға яуаптар табаһың уларҙың фекерҙәренән.

Ниндәйҙер мәғлүмәтте ҡабул итергә әҙер булһаң, уҡытыусы мотлаҡ килә, тиҙәр бит әле. "Киске Өфө" минең өсөн ошондай уҡытыусы, остаз булды. Районда йәшәһәк тә, баш ҡалабыҙ менән бәйләнештә беҙ уның һәр һулышын тоябыҙ. Гәзитебеҙ беҙҙе берҙәм итә, берләштерә. Улай ғына ла түгел, халҡыбыҙҙың үҙ асылына ҡайтыуына, рухын байытыуға, үҙ еребеҙ, милләтебеҙ менән ғорурланырға өйрәнеүгә ҙур өлөш индерә баҫмабыҙ. Бөгөнгө заманда юғалып ҡалмайым, тормошта үҙ урынымды табам, тиһәң, мотлаҡ уҡырға кәрәк был гәзитте.

**Мәҙинә ӘФЛӘТУНОВА.**
**Йылайыр районы**
**Һултантимер ауылы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Баш каланың һәйкәлдәре һәм тарихи урындары тураһында һөйләгәндә беҙ иң тәүҙә 1500 йыллык тарихи комарткы булған "Өфө-II" каласығын телгә алырға тейеш түгелбеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Тамара ҒӘНИЕВА, яҙыусы:*** Башҡортостандың боронғо сәйәхәтселәр һәм йылъяҙмасылар тарафынан Ҡалалар иле тип йөрөтөлөүе хәҙерге тарихсылар тарафынан оҙаҡ ваҡыттар телгә алынманы. Мәғлүмәттәр матбуғат баҫмаларына килеп ингәс тә, ҡайһы бер тарихсылар, ғалимдар күтәрелеп-бәрелергә тотондо. Имештер, башҡорттарҙың бәҫе һәм мәртәбәһен арттырып ебәреү түгелме был? Әммә тарихты, бигерәк тә археологияны юйып ташлап булмай. 70-се йылдарҙа, Өфө ҡалаһына рус стрелецтары XVI быуатта ғына нигеҙ һалған, тигән фекер нығынып киткәйне. Рәсәй өсөн дә, уның ҡайһы бер тарихсылары өсөн дә был ҡулай ине. Беҙ иһә, һуңғы 3-4 быуат эсендә үҙ мәртәбәбеҙ һәм бойондороҡһоҙлоғобоҙ өсөн баш күтәрә-күтәрә миктәгән, шуға ла ҡайһы бер ғәҙелһеҙлектәргә күнергә өйрәнеберәк барған милләт булараҡ, был ысынбарлыҡҡа тура килмәгән факттты ла сабырлыҡ менән ҡабул иттек. Ә бит был уйҙырмаларҙы инҡар итеүсе тарихи сығанаҡтар ул осорҙа ла билдәле була. Мәшәүерәкме икән беҙ, ҡурҡағыраҡтырмы, үҙебеҙҙең ҡаҙаныштар, донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшөбөҙ хаҡында ауыҙҙы ҙур асып һөйләүҙән тыйылабыҙ. Ә бит академик Нияз Мәжитовтың тырышлығы һәм фиҙаҡәрлеге менән нисәмә-нисә ҡатлам аша алдыбыҙға килеп баҫҡан археология ҡомартҡыһының Рәсәй территорияһындағы иң боронғо ҡалаларҙың береһе булыуы хаҡында Рәсәй Фәндәр академияһы Европа-Азия далалары археологияһының урта быуаттар төркөмө етәксеһе, профессор, тарих фәндәре докторы И.Л. Кызласов, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһының Сирия археология экспедицияһы начальнигы тарих фәндәре докторы Ш.Н. Әмиров, шул уҡ институт хеҙмәткәре И.А. Сапрыкина һәм Башҡортостан ғалимдары ҡатнашлығындағы Эксперт советы 2007 йылдың 17- 18 августында Башҡортостан Республикаһының саҡырыуы буйынса Өфөлә булды. Эксперт советы Өфө-II ҡаласығының ғилми әһәмиәтен билдәләү өсөн археологик ҡаҙылманы һәм унан табылған ҡомартҡыларҙы ҡараны һәм уны тиңе булмаған, йәшәү ваҡыты яңы эраның IX-XV-XVI быуаттарына тура килгән, ғилми һәм мәҙәни әһәмиәте яғынан бәхәсһеҙ археологик ҡомартҡы, тип таныны. Шул рәүешле, ҡаласыҡ Башҡортостан һәм Көнъяҡ Урал өсөн генә түгел, тотош Көнсығыштың ҡиммәтле тарихи сығанағы, фәнни яҡтан ҙур әһәмиәткә эйә ҡомартҡыһы тип баһаланды.



Тағы ла кемдең ризалығын алырға теләйбеҙ һуң бөгөн? Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламдарын ентекле өйрәнеү Рәсәй фәненең етди археологик обьектына әүрелергә тейеш түгелме ни?

Башҡортостандың йәш менеджерҙары, Башҡортостан туристик яҡтан әһәмиәтле булһын өсөн беҙҙең үҙ "бренд"ыбыҙ булырға тейеш, тип баш вата. Бер ҡатлыраҡ кешеләр бал, башҡорт шәле, ҡымыҙ, ҡаҙылыҡ менән арбарға кәрәк туристарҙы, тигән фекерҙәр әйтә. Дөрөҫ, беҙҙең ризыҡтарҙың да тиңе юҡ ул. Әммә ана шул телгә алынған һый-хөрмәт "Өфө-II" ҡаласығы музейы янында тәҡдим ителһә, беҙҙең мәртәбәбеҙ юғарыраҡ булыр ине бит.

***Юлдаш ЙОСОПОВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Әлбиттә, Өфөбөҙҙөң боронғолоғон рәсми кимәлдә танырға ваҡыт. Археологик ҡомартҡылар, Европа, шәреҡ ғалимдарының яҙмалары, карталар хәҙерге Өфөнөң боронғо Башҡорт ҡалаһы нигеҙендә ултырыуын тулыһынса раҫлай. Башҡорттарҙың үҙҙәренең тарихи хәтеренән теркәлгән яҙмалар ҙа был инаныуҙы нығыта. Ҡасандыр был урында башҡорттарҙың бөйөк ҡалаһы булыуын иҫләүе хаҡында Рычков яҙа. Шулай уҡ "Сыңғыҙнамә" дастанында ла Өфө йылғаһы тамағында ҡала булыуы, унда хан йәшәүе бәйән ителә. М. Өмөтбаевтың шәхси архивында үҙем өсөн ҡыҙыҡлы бер мәғлүмәткә юлыҡтым. Унда башҡорттарҙың күп һанлы ҡәлғәләре, етмеш ҡалаһы барлығы телгә алына. Уларҙың 1152 йылда Ислам диненең ҡабул иткәнлеге лә теркәлгән. Ошо мәғлүмәттән сығып, шундай һығымта яһарға була:

- бер территорияла йәшәүсе бер халыҡтың шунсама ҡалаһы булыуы, һис шикһеҙ, уларҙың төп, йәғни баш ҡалаһы барлығын да аңлата;
- башҡорттарҙың берҙәм рәүештә 1152 йылда Ислам динен ҡабул итеүе уларҙың ойошоп йәшәүе, бер ханға (батшаға) буйһоноуын да белдәрә;
- тимәк, баш ҡала - Башҡорт булып сыға һәм ул ҡалған 69 ҡаланың үҙәге һаналған була.

Ошоларҙан сығып ҡына ла, әлеге Өфөлә табылған "Өфө-II" ҡаласығын Европа ғалимдары урта быуаттарҙа үҙ карталарында билдәләгән Башҡорт ҡалаһы тип атарға тулы нигеҙ бар. Халыҡтың үҙенең тарихи хәтеренән дә анығыраҡ һәм ышаныслыраҡ дәлил юҡ донъяла.

Йәғни, башҡорттарҙың берҙәм рәүештә мосолман динен ҡабул итеүе уның бер етәкселеккә буйһоноп, бер үк сәйәси, иҡтисади һәм мәҙәни мөхиттә йәшәүен, тимәк, дәүләтселеге булыуын раҫлай. Ул осорҙа дәүләтселегебеҙ, уның үҙәге - баш ҡалаһы булмаһа, үҙенең тышҡы һәм эске азатлығын иң беренсе урынға ҡуйып йәшәгән халыҡ вәкилдәрен бер юлы Ислам диненә йәлеп итеү мөмкин дә булмаҫ ине. Сөнки башҡорттарҙың барыһы ла Исламды ирекле рәүештә ҡабул итмәгән, уны индереү өсөн генә түгел, хатта ҡабул итеү өсөн дә дәүләтселек кимәлендәге механизм кәрәк булған. Шул уҡ ваҡытта боронғо Өфө бер нисә сауҙа юлының киҫешкән урынында ултырған. Билдәле тарихсы Вахрушин яҙыуынса, Себер менән Урта Азияны сауҙа менән тоташтырыусы юл Өфө аша үткән. Ә бит сауҙа - ҡаланың төп күрһәткестәренең береһе иҫәпләнә. Ҡыҫҡаһы, Өфөнөң боронғолоғон һәм уның тап Башҡорт ҡалаһы булыуын раҫлаусы мәғлүмәттәр, документтар етерлек, тик уны Хөкүмәт кимәлендә махсус ҡарар менән нығытып ҡуйырға ғына кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Көньяҡ Уралда тарихи әһәмиәте буйынса Өфөгә тиң булған башҡа Урта быуат археологик ҡомартҡыһы юҡ, ти ғалимдар. Был йәһәттән уны боронғолоғо археологик һәм яҙма сығанаҡтарға нигеҙләнеп раҫланған Мәскәү, Новгород, Киев, Ташкент ҡалалары менән генә сағыштырырға мөмкин. Эйе, нимәлер раҫларға, иҫбатларға ла түгел бында археолог-тарихсыларға. Барыһы ла раҫланған. Улар - рус һәм сит ил тарихсы-сәйәхәтселәре материалдарында, карталарҙа аҡҡа ҡара менән яҙылған. Шуларҙы раҫлаусы, быуаттар күмеп ҡуйған тарихты соҡоп сығарыусы ғына беҙҙең заман тарихсылары. Улар ҡулында хәҙер байтаҡ материалдар, уларҙы нығытыусы ҡомартҡы әйберҙәр етерлек. Тик ни өсөн беҙ, дәлилдәр, иҫбатлауҙар була тороп, хәҡиҡәти һүҙ әйтеүҙе ошоға тиклем һуҙҙыҡ? Бына шуныһы ғына ғәжәп...**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов граждандарҙың льготалы категорияларын дарыуҙар менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. "Быйыл минә граждандарҙан дарыу тәьминәте буйынса бик күп ялыуҙар һәм мөрәжәғәттәр килде, - тип билдәләне төбәк етәксеһе. - Минең мәғлүмәттәр буйынса, бөгөн 600-ҙән ашыу рецепт үтәлмәгән. Һаулыҡ һаҡлау министры мине һәр дүшәмбе, бәлки, көн һайын хәлде яйға һалыу буйынса оператив кәңәшмәләр үткәрелә тип ышандырһа ла, әлегә хәл үҙгәрмәй. Ләкин һөҙөмтәләрҙе күрмәйем".

✓ Был аҙнала республиканың 28 муниципалитетында һабан байрамы ойошторола. 10 июндә һабантуй Әбйәлил, Аҫҡын, Баймаҡ, Баҡалы, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бишбүләк, Бөрө, Благовещен, Борай, Ғафури, Йәрмәкәй, Илеш, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡыйғы, Краснокама, Кушнаренко, Миәкә, Нуриман, Стәрлебаш, Тәтешле, Саҡмағош, Шаран, Яңауыл районДарында һәм Күмертауҙа уҙа. 12 июндә һабантуй Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә була.

✓ 9 июндә, "Евразия йөрәге" фестивале менән бәйле Өфөнөң ҡайһы бер урамдарын ябалар. Көндөҙгө сәғәт 2-нән 6-ға тиклем өлөшләтә сикләү килеһе участкаларға ҡағыла: Совет урамы - Октябрь революцияһы киҫелешенән Зәки Вәкиди урамы киҫелешенә тиклем; Театр урамы - Пушкин урамы киҫелешенән Зәки Вәлиди урамы киҫелешенә тиклем; Пушкин урамы - Цюрупа урамы киҫелешенән Карл Маркс урамы киҫелешенә тиклем; Зәки Вәлиди урамы - Совет урамы киҫелешенән Мәжит Ғафури урамы киҫелешенә тиклем.

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанда йәшәүселәрҙе һөнәри эшмәкәрлектәрендәге юғары ҡаҙаныштары өсөн билдәләне. "Аманат" балалар-үҫмерҙәр журналының баш мөхәррире Сәлмән Ярмуллинға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән исем бирелде.

✓ Башҡортостан шашкасылары Тамара Танһыҡҡужина һәм Александр Георгиев Италияның Бергамов ҡалаһынан "йәшен тиҙлегендәге" донъя чемпионатынан миҙалдар менән ҡайтты. Халыҡ-ара ярыштарҙа республиканан ете шашкасы ҡатнашты, уларҙың бишәүһе финалға сыҡты, тип хәбәр иттеләр Шашка федерацияһында.

✓ ***Республика буйынса ЮХХДИ етәксеһе Д. Ғилметдинов, иҫерек килеш машина йөрөтөүсе водителдәр һаны буйынса Башҡортостан Мәскәүҙән ҡала икенсе урында, тип белдергәйне. Былтыр уларҙың һаны 28 меңгә барып баҫҡан!***



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# АҠЫЛҒА УЛТЫРМАЙЫНСА...

## руль артына ултырма!

**Күптән бирле ҡырмыҫҡа иләүе кеүек ҡымжыған машиналарға бер йәйәүленең "теш ҡайрауын" иғтибарлы уҡыусыбыҙ һиҙә лә торғандыр. Ә, бәлки, ул да ошо яҙмалағы ваҡиғалар айҡанлы борсолалыр. Һәр хәлдә, Өфө буйынса ғына түгел, ә бөтөн Рәсәй кимәлендә "водитель - йәйәүле" проблемаһы (юҡ, һуғышы тип әйтке килә) көндән-көн киҫкенләшә һәм әҙәпһеҙ генә түгел, ә кешелекһеҙ, ғибрәтле төҫ ала барыуын күрә-белә йөрөп тә, өнһөҙ ҡалыу мөмкин түгел. Һуғыш, тип әйтерлек тә, сөнки элек әҙәм балаһы бөткөһөҙ һуғыштарҙа ҡырылһа, әле - тәгәрмәс аҫтында...**

Машина - ҡиммәтле уйынсыҡ түгел, ул йомош-юлды ҡыҫҡартыу, ниндәйҙер мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатында файҙаланыла торған кәрәкле транспорт сараһы. Үкенескә, был сара йыш ҡына юлды түгел, ә ғүмерҙәрҙе ҡыҫҡартыусы сәбәпкә әүерелә, сәләмәтлекте ҡаҡшата, ә кемдәрҙелер "рәшәткә артына" ултыртып ҡуя. Быларҙың бөтәһендә үк булмаһа ла, күпселегендә руль артында ултырыусы кеше ғәйепле булып сыға. Беҙҙең халыҡ менталитеты ҡыҙыҡ бит ул. Хәйер, уйлап ҡараһаң, ул илебеҙ тарихына, халыҡтың тормош кимәле үҫешенә бәйле. Бер ҡырҡ-илле йыллап элек кенә әле еңел машина (уныһы ла "Жигули" йә "Москвич" булыр ине) һатып алған кеше абруйлы, хәлле әҙәм булып тойола ине. Әле лә беҙ тормош насар, тип зарланабыҙ, әммә һәр ғаиләлә тип әйтерлек - машина, хатта икешәр, өсәрҙе алғандары бар. Ҡыҫҡаһы, машина алмаған кеше ҡалманы, беҙ быға хәҙер аптырамайбыҙ ҙа, һоҡланмайбыҙ ҙа, көнләшмәйбеҙ ҙә - тәбиғи тормош хәлебеҙ шундай, йәғни: яҡшы, тимәк. Ҡыуанырға ғына кәрәк тә бит. Өҫтәүенә, һәр берәүҙә - берәһенән-берәһе текәрәк иномарка. Аҡсаң булмаһа ни - рәхим итеп, кредитҡа ал - лафа! Уныһына ла күҙ күнекте, тик ана шул "матур уйынсыҡ"тарының эсенә инеп ултырыу менән бәғзе берәүҙәрҙе өйәнәге килә лә тота бит: йәнәһе лә, күрәһегеҙме, ниндәйерәк иномаркала елдерә ул! Тик бына тормош кимәле һис тә генә аң кимәлен билдәләмәй икән шул. Әлеге лә баяғы тарихыбыҙ буйына мандый алмай, әйбер күрмәй йәшәп килгән халыҡ аңы, менталитет күләгәһе күҙен тондора, шашындыра ҡайһы берәүҙе. Руль артында бөтөнләй икенсе әҙәмгә әүерелә ундайҙар: тәкәбберлек, башҡаларҙы һанламау, үҙ-үҙенә һоҡланыу, эгоизм ғәләмәттәре менән "сирләй" башлайҙар. Шулай булмаһа, эскән килеш машинаһына ултырып алып, елдереп сығып китеүҙе нисек аңлатырға була? Әлеге мин-минлектән килә түгелме һуң был ҡылыҡ? Ярай ҙа былдай күҙе тонған үҙе генә берәй ергә барып төкөп, аңына килһә - юҡ, юл хәрәкәтендә ҡатнашыусы башҡаларға үлемесле хәүеф тыуҙыра бит ул!

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә БСТ-ның яңылыҡтар сығарылышында күрһәтелгән ҡот осҡос видео сәбәпсе булды ла был яҙмаға. Уны нәфрәтләнмәйенсә ҡарап булмай, билләһи. 10 майҙа Өфөнөң "Нур" татар театры туҡталышында була был. СССР-ҙың 50 йыллығы урамынан шәп тиҙлектә елдереүсе "Фольксваген" автомобиле көтмәҫтән киҫкен боролоп, шул урам менән К. Абрамова кiҫелеше тәңгәлендәге туҡталышта автобус көтөп тороусы пассажирҙар өҫтөнә барып менә лә, юлындағы бер нисә кешене тирә-йүнгә сәсрәтә бәреп, яҡындағы пекарняға килеп төкөй. 4 кеше йәрәхәтләнә, шуларҙың береһе 31 йәшлек ҡатын баш һөйәге һынып, мейеһе һелкенеп, ауыр хәлдә 21-се дауахананың нейрохирургия бүлегенә оҙатыла. Хәйер, баш ҡалабыҙҙағы юл-хәрәкәт фажиғәләренә аптырарға түгел: иртән тороп бит йыуған кеүек өйрәнелгән инде уға. Нәфрәтләндергәне шул: әлеге руль артындағы "текә" әҙәмдәрҙең кешелекһеҙлеге. Был осраҡта ла шулай килеп сыға: әле бәйән ителгән юл һәләкәтендә ғәйепле ир - "Фольксваген" водителе Андрей Большаков тигән әҙәм, өйәнәгем тотто, тип, әллә бар, әллә юҡ сиренә һылтанмаҡсы икән. Әлеге лә баяғы, "тәкәбберлек өйәнәге"ме әллә, юғиһә? Дөрөҫ, был ҡот осҡос ваҡиға тулыһынса тикшерелеп, уға баһа бирелмәгән, шулай ҙа водителдең ғәфү үтенеүҙән бигерәк, зыян күреүсенең хәле менән дә ҡыҙыҡһынмауы, был хәл айҡанлы бер ниндәй үкенес билдәһе белдермәүе аптырата. Зыян күреүсе йәш ҡатындың әсәһе Светлана Воробьева әйтеүенсә, "өйәнәкле" был водитель ошо ваҡиғанан һуң баш мейеһенә тикшереү үткән һәм был йәһәттән бер ниндәй ҙә тайпылыштар асыҡланмаған. Водитель сирле кеше булған хәлдә лә һорау тыуыр ине: өйәнәк менән яфаланыусыға кем таныҡлыҡ биргән һуң? Бөгөн илдә коррупция сәскә атҡан шарттарҙа уны һатып алыу ҙа бер ни түгел, уйлап ҡараһаң... Ваҡиға шаһиттары версияһы буйынса, водитель педалдәрҙе бутаған һәм яңылыш газға баҫҡан. Был осраҡта ла уның машина йөрөтөүҙә тәжрибә һәм белем кимәле шикләнеү тыуҙыра. Ҡыҫҡаһы, баш ҡалала киң шаңдау алған был осраҡ ентекле тикшерелеп, ғәйепле ғәҙел язаһын алыр, тигән өмөт бар. Әлбиттә, водителдәр күп осраҡта йәйәүлене ғәйепләргә тырыша, тик был осраҡта ғәйептең бер яҡлы икәне видеола уҡ асыҡ күренеп тора: машина шәп тиҙлектә тротуарға килеп менә; автобус көтөп тороусының йә магазиндан икмәк, тәмтом алып, үҙ юлынан өйөнә, сабыйы янына ашығыусы йәйәүленең тамсы ла ғәйебе юҡ! Ауыр йәрәхәт алған ҡатындың әсәһе Светлана ханыма ғәҙеллек юллауҙа Хоҙай ярҙам һәм сабырлыҡ бирһен, ә ҡыҙы тиҙерәк йүнәлеп, дауахананан сыҡһын һәм сабыйын ҡосағына алһын, тип теләйек.

Был ваҡиға ғәҙеллек юллауҙың беҙҙә ни тиклем ҡатмарлы һәм дә хәүефле булыуын бөтөн илгә фаш иткән 6 йәшлек "иҫерек" (шундай мөһөр һуҡтылар!) малайҙың тәгәрмәс аҫтында ҡалып һәләк булыу фажиғәһен иҫкә төшөрҙө. Ярай ҙа, мәрхүм баланың атаһы улының һәм, ғөмүмән, ғаиләһенең намыҫы өсөн оҙайлы алышта "бысраҡты" йырып сығып, исемдәрен аҡлатыуға өлгәшә алды. Был мөмкин дә булмаҫ ине, мәсьәләне киң матбуғат саралары, телевидение һәм йәмәғәтселек үҙ индәрен ҡуйып, контролгә алмаһа, һүҙ ярҙамы, башҡа яҡлау саралары күрмәһә...

Һәр көн иртәнсен, һөнәри ғәҙәт буйынса, яңылыҡтарҙы барлауҙан башларға күнегелгән. "Яндекс" системаһы буйынса Өфө порталын асһаң, шундағы биш хәбәрҙең өсәүһе мотлаҡ үткән тәүлектәге юл-хәрәкәт ваҡиғалары хаҡында һөйләй булыр. Ә шул тәүлек эсендә генә лә тағы әллә күпме юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу факттары теркәлә, акттар төҙөлә, штраф һалына. Мәҫәлән, 25 май рейды йомғаҡтарын ғына алып ҡарайыҡ: бер тәүлектә генә лә 2 667 административ материал тултырылған, шуларҙың 115-е - ҡаршы юлға сыҡҡан өсөн. Эскән килеш руль артына ултырған 67 водитель тотолған. Хәҙер 14 - 20 май йомғаҡтарына күҙ һалайыҡ: 17 062 юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу осрағы теркәлгән, шуларҙың 351-е - эскән килеш машина йөрөтөүсе водителдәр. Ғөмүмән, былтырғы йыл йомғаҡтарын яһағанда, республика буйынса ЮХХДИ етәксеһе Д.Ғилметдинов, иҫерек килеш машина йөрөтөүсе водителдәр һаны буйынса Башҡортостан Мәскәүҙән ҡала икенсе урында, тип белдергәйне. Былтыр уларҙың һаны 28 меңгә барып баҫҡан! Был әле тотолоп, теркәлгәндәре генә. Ә бер ниндәй язаһыҙ йөрөп ятҡандары күпме? Хәйер, язаһын да әйтер инем, ташҡүлсәйем. Штраф түләй ҙә ҡотола. Күпмелер ваҡытҡа таныҡлығын тартып алыу ҙа туҡтатмай ундайҙарҙы. Тимәк, яза йомшаҡ, шуға күрә бер тотолған иҫерек водитель ҡабат-ҡабат килеп эләгә лә инде. Әйтерһең дә, бесәй-сысҡан уйыны уйнайҙар... Ҡат-ҡат башынан һыйпамаҫҡа, ә тәү тотолғанда уҡ арт һабағын уҡытырлыҡ сара күрергә ине уларға. Мәҫәлән, Сингапурҙағы һымаҡ. Унда ысын мәғәнәһендә иҫерек водителде ғүмерлеккә аҡылға ултырталар: махсус таяҡ менән һуҡтыралар. Был ил компромисһыҙ саралар һәм ҡаты закон нигеҙендә коррупциянан да шулай ҡотола алды. Һөҙөмтә килтергән тәжрибәгә таяныу кәрәк шул Рәсәйгә лә. "Кешелекле закон", имеш. Уны ла бит урынерен белеп ҡулланыу кәрәк, ә енәйәтсегә ҡарата түгел. Таиландта тағы ла ҡатыраҡ сара күрелә. Әгәр иҫерек водитель кемдеңдер үлеменә сәбәпсе булһа, уның үҙен дә үлем язаһы көтә. Японияла ла яратмайҙар эскәндәрҙе: 10 йылға йә ғүмерлеккә таныҡлығы тартып алына. Ҡытайҙа ундайҙарҙы төрмә көтә. Азия илдәрендә сағыштырмаса тәртип бар, сөнки улар ҡаты, ләкин ғәҙел сара күреү яҡлы, сөнки эскән водителдең асылда потенциаль үлтереүсе икәнен иҫбатлау кәрәкмәй - дәлилдәр көн дә тыуып ҡына тора. Рәсәйҙә эсеп, машина йөрөтөргә әүәҫтәргә ҡарата яза сараһын бермә-бер ҡәтғиләштереү мәсьәләһен хатта ил Президенты В.Путин да күтәреп сыҡҡайны, тик уның күрһәтмәһе ни өсөндөр башҡа мәшәҡәт һәм ығы-зығы араһында юғалып ҡалды. Эскән килеш ҡабатлап рулгә тотонған һәм йәрәхәтләнеү йә үлем осрағы өсөн ғәйепләнене һәр анығ осраҡтан сығып, 4 йылдан 9 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү тураһында беҙҙә лә закон бар, тик Рәсәй суд системаһы уны йыш ҡулланa, тип әйтеп булмай. Ҡулланған хәлдә лә ғәйепләнеүсе штраф йә кәрәкле кешеләргә башҡа төрлө "түләү"ҙәр, яҡшы ҡылыҡһырлама кеүек әмәлдәр менән ҡатыраҡ язанан барыбер ҡотолоп ҡалыу юлын таба...

Был үкенес "ҡан көҫәүҙән" түгел, ә эсеп, руль артына ултырырға йөрьәт итеүселәргә ғибрәт булһын, тыйылғандан тыйылыусылар һаны арта барһын тигән теләктән килә. Текә машинала елдереү - аҡыл билдәһе лә, мәртәбә лә түгел. Ир аҡылы юлда һынала, ти халыҡ әйтеме. Машинаңды төҙөк тотоп, йылдар буйы юлдарында бер ниндәй аварияһыҙ йөрөү - бына шул була ла инде аҡылдың үҙе.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығында конкурс комиссияһы яңы эш башлаған фермерҙар һәм ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү өсөн грант алыусыларҙы һайлай. Быйыл ведомствоға 185 ғариза килгән. "Яңы эш башлаған фермерҙарға ярҙам" 90 процент бюджет аҡсаһы һәм 10 процент үҙ аҡсаңа схемаһы буйынса грант биреүҙе күҙ уңында тота. Һөт һәм ит малсылығына - 3 миллион һумға, йылҡысылыҡ, һарыҡсылыҡ, кәзәселек, ҡошсолоҡ, умартасылыҡ, балыҡсылыҡ, бөртөклө һәм емеш-еләк культураларын үҫтереү, йәшелсәселек өсөн 1,5 миллион һумға яҡын аҡса бирелә.

✓ Өфөлә дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә күп профилле реабилитация комплексы төҙөү буйынса проект ғәмәлгә ашырыла. Концессия килешеүе нигеҙендә "Медстандарт" медицина холдингы Октябрь проспектындағы ике ҡатлы Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәр өсөн республика реабилитация үҙәге бинаһын (0,5 гектарға яҡын участкала урынлашҡан 897 квадрат метр майҙанда) реконструкциялауҙы һәм йыһазландырыуҙы 427 миллион һумға инвестициялай.

✓ Башҡортостандың оҙайлы кредит рейтингы "BBB-" кимәлендә раҫланды, прогноз "Тотороҡло"нан "Ыңғай"ға үҙгәртелде. Fitch Ratings халыҡ-ара рейтинг агентлығы ошондай ҡарар сығарҙы. Әлеге ваҡытта Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы, Татарстан, Төмән өлкәһе, Ямал-Ненец автономиялы округы, Мәскәү һәм Санкт-Петербург менән бер кимәлдәге кредит рейтингына эйә.

✓ Мәскәүҙә А.С. Пушкиндың тыуған көнөнә һәм Рус теле көнөнә арналған IV "Ҡыҙыл майҙан" китап фестивале тамамланды. Фестиваль барышында Рәсәй Китап сығарыусылар ассоциацияһы уҙғарған "Йылдың иң яҡшы китаптары" Бөтә Рәсәй конкурсы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Йылдың иң яҡшы китаптары" конкурсының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнде.

✓ "Башҡортостан байлыҡтары сауҙа йорто" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең төбәк етештереүсеһенән тәүге партия - 1740 килограмм башҡорт балы ошо көндәрҙә ирекле һатыу өсөн Польшаға оҙатылды. Сит илгә оҙатҡанға тиклем ведомство белгестәре аҙыҡ-түлекте Таможня союзы һәм Европа союзының Техник регламенттары талаптарына ярашлылыҡҡа тулы лаборатор тикшереү үткәрҙе.

✓ ***"Беҙҙең менталитетыбыҙ икенсе. Был күренеш совет йылдарында ла дауам итте. Сөнки беҙҙә яуаплылыҡ көслө. Кешелек ҡиммәттәре тураһында күпме генә бәхәс ҡормайыҡ, Тыуған илде кем яҡларға тейеш? Өфөләр!"***

*БАШ ҠАЛАМ*



# БЕҘ - СИК ҺАҠСЫЛАРЫ!

**Был көндәрҙә Рәсәйҙә генә түгел, Башҡортостанда ла Сик һаҡсылары ғәскәрҙәре ойошторолоуҙың 100 йыллығы киң билдәләнде. Төрлө райондарҙа уларға һәйкәлдәр ҡуйылды. Баш ҡалала ла яңы скульптура барлыҡҡа килде - Еңеү паркында сик буйы һаҡсыларына һәйкәл асылды. Былтыр Сик буйы ғәскәрҙәре байрамына арналған тантанала ҡатнашып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов оло юбилейға һәйкәл асырға вәғәҙә иткәйне. Был ансамбль - мәрҙың үҙ һүҙендә тороуына дәлил булып та ҡалҡып сыҡты.**

Хәлит Ғәлиуллин эшләгән ансамбль "Барлыҡ быуын сик һаҡсыларына дан" тип атала һәм совет хәрби формаһындағы сик һаҡсыһы менән уның тоғро дуҫы - овчарканы һынландыра. Һәйкәлдең уң һәм һул яғына дүрт билдә ҡуйылған - Хәрби-һауа көстәренең сик буйы ғәскәрҙәренә, Дәүләт Именлек хеҙмәтенең сик буйы ғәскәрҙәренә, ябай сик һаҡсыларына һәм сик буйы ғәскәрҙәренең диңгеҙ частарына (хәҙер Федераль Именлек хеҙмәтенең сик буйы ғәскәрҙәренең яр буйы һағы тип атала).

Һәйкәл ысын мәғәнәһендә сик буйында хеҙмәт итеүселәр өсөн ҙур бүләк булды. Уны тантаналы асҡан ваҡытта уйымда ғына булһа ла үҙемдең хеҙмәт иткән йылдарға ҡайтып ураным, ҡабат ошо йылдар кисерештәре солғанышында ҡалдым. Күңелдә ғорурлыҡ тойғоһо тағы ла көсәйҙе. Сөнки сик буйын һаҡлау - ул ысын мәғәнәһендә Ватанды һаҡлау, сөнки һинең артыңда тыуған ереңдең территорияһы башлана бит. Сик буйы һаҡсыларының иңенә шундай оло яуаплылыҡ һалынғанға күрә лә, был ғәскәрҙәргә хеҙмәт итергә егеттәрҙе хәҙер дөйөм саҡырыу буйынса түгел, ә контракт буйынса ғына алалар. Әгәр башҡа ғәскәрҙәрҙә 1 йыл хеҙмәт итһәләр, сик буйы һаҡсыларының мөҙҙәте - 5 йыл, сөнки сик буйын һаҡлағанда ҡулланылған заманса техниканы бер йылда ғына өйрәнеп бөтөү мөмкин түгел, ысын профессионал булыу өсөн оҙайлы ваҡыт кәрәк. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы буйынса Федераль Именлек хеҙмәте профориентация эшмәкәрлеге алып бара һәм 11-се синыфты тамамлаған 50 егетте йыл һайын сик буйы һаҡсыларын әҙерләүсе институттарға уҡырға ебәрә. Беҙҙең егеттәр әлеге ваҡытта Рәсәйҙең барлыҡ сик буйында ла Ватанды һаҡлай.

Еңеү паркында урынлашҡан был һәйкәл өфөләрҙең сираттағы ял итеү урыны, сик буйы һаҡсыларына хөрмәт һәм рәхмәт билдәһе генә булып ҡалмаҫ, ә киләсәк быуындар өсөн Тыуған илгә хеҙмәт итеүҙең, уны һаҡлауҙың өлгөһө лә булып торор, тип өмөтләнәм.

**Венер НӘБИЕВ,**
**сик буйы ғәскәрҙәре ветераны.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмә гәзәттәге инеш һүҙҙән түгел, төп теманан башланды һәм һүҙ ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизовҡа бирелде. Ул 1 апрелдән 1991 - 2000 йылғы граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһы барышы тураһында бәйән итте.**

# УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

"Традиция булараҡ, Башҡортостан, шул иҫәптән Өфө ҡалаһы өсөн наряд йыл һайын юғары күләмдә билдәләнә. Был алдағы йылдарҙағы нарядты сифатлы үтәүгә бәйле, - тине Рөстәм Фәрит улы. - Яҙғы саҡырылышта баш ҡаланан 931 кеше әрме сафына ебәрелергә тейеш. Былтыр норма 922 булып, йәмғеһе 917 егет оҙатылғайны. Волга буйы федераль округының башҡа ҡалалары менән сағыштырғанда, Өфөгә төшөрөлгән наряд - иң ҙуры. Мәҫәлән, баш ҡалала 1131400 кешегә наряд 931, Пермдә - 682 (1048050); Ҡаҙанда - 912 (1243500), Ижевскиҙа - 323 (646277), Һамарҙа - 691 (1169719), Екатеринбургта - 860 (1455904).

Ҡала буйынса саҡырыу пункттарына 2430 кеше килгән, был армияға китергә тейешле граждандарҙың 31 проценты. 412 кеше хәрби хеҙмәткә оҙатылған (44 процент). Район хакимиәттәре, Йәмғәт именлеге үҙәге көстәре менән саҡырыу йәшендәге барлыҡ граждандарҙы иҫкәртеү буйынса ҙур эш башҡарыла. Бөгөнгә 712 граждан менән осрашып, 526-һына саҡырыу пунктына килеү өсөн повестка ҡалдырылған.

Берҙәм иҫәп-касса үҙәктәре хәрби хеҙмәткә барырға тейешле граждандарҙың теркәлеү урынының дөрөҫлөгөн тикшерә, шулай уҡ ҡаралырға ебәрелгән егеттәрҙең медицина тикшереүен тиҙ арала үтеүе буйынса эш алып барыла. Аҙна һайын уҡыуҙан сығарылған студенттар хаҡында мәғлүмәт килә, бөгөнгә ундайҙар һаны 224 кеше".

Үҙ сиратында Ирек Ялалов хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙың сәләмәтлек торошо менән ҡыҙыҡһынды. "Һәр саҡ ошо мәсьәләгә иғтибар йүнәлтеүегеҙҙе һорайым, әммә был хаҡта бер һүҙ булманы. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге коллегаларығыҙ менән был хаҡта айырым доклад әҙерләгеҙ. Сөнки призывниктарҙың сәләмәтлек торошо буйынса хәүефле сигналдар килә. Ә хеҙмәткә саҡырыуҙы ойоштороу һәм нарядты үтәү буйынса беҙҙең яйға һалынған система бар. Икенсе яҡтан, беҙ ошо сифатлы системаның әсирҙәре лә. Ни өсөн Екатеринбург ҡалаһында миллион ярымдан күберәк халыҡ йәшәй, әрме хеҙмәтенә егеттәрҙе әҙерәк саҡыралар? Башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда, Өфөлә ни өсөн күрһәткестәр юғары икәнен анализланығыҙмы? Совет заманына, унан ғына ла түгел, башҡорттарҙың Рәсәй дәүләте составына инеүе осоронан алып шундай система барлыҡҡа килгән һәм тормошҡа ашырыла. Беҙҙең менталитетыбыҙ, йолаларыбыҙ икенсе. Был күренеш совет йылдарында ла дауам итте. Сөнки беҙҙә яуаплылыҡ көслө. Кешелек ҡиммәттәре тураһында күпме генә бәхәс ҡормайыҡ, Тыуған илде кем яҡларға тейеш? Өфөләр!" - тип белдерҙе ул.

Сираттағы тема ҡала пляждарының һыу инеү миҙгеленә әҙерләгенә арналды. Был өлкәләге хәл-торош менән "Граждандарҙы һаҡлау идаралығы" МБУ-һы начальнигы Рәсим Абдуллин таныштырҙы. Йәйгеһен, ысынлап та, йылға-күлдәр ҙур хәүеф сығанағына әүерелә, тап ошо осорҙа һыуға батып үлеүселәр һаны арта.

"Халыҡтың уңайлы ялын тәьмин итеү һәм бәхетһеҙ осраҡтарға юл ҡуймау өсөн йылға һәм күл буйҙарында 9 зона булдырыла. Ағиҙел йылғаһы акваторияһында: Ҡояшлы (Киров районы), Затон (Ленин районы), Ҡариҙелдә - Ҡояш яры, Һупайлы Сочиһы (Октябрь районы), Ҡомло (Калинин), күлдәрҙә: Карьерлы (Дим районы), Ҡашҡаҙан (Октябрь районы), Гольфстрим (Калинин районы). Сағыштырыу өсөн: Пермдә ял зоналары - 5, Ҡаҙан менән Екатеринбургта - 7-шәр, Һамарҙа - 8". Рәсим Миҙехәт улы белдереүенсә, ял зонаһы территорияһын ҡуртымға алыусы эшҡыуарҙар менән кәңәшмә үткәрелгән, уларға территорияны йыһазландырыу, сауҙа нөктәләрен ойоштороу тәртибе, кешеләрҙең именлеген тәьмин итеү саралары буйынса талаптар ҡуйылған. Күмәк халыҡтың ялы ойошторолаcаҡ урындарҙағы һыу сығанаҡтарынан, тупраҡтан анализ алынған, йылға-күлдәрҙең төбө таҙартылған, талпанға, кимереүселәргә, серәкәйҙәргә ҡаршы эшкәртеү саралары уҙғарылған.

Өфө ҡалаһының Эҙләү-ҡотҡарыу отряды тарафынан тәүлек әйләнәһенә дежурҙа буласаҡ водолаздар төркөмө ойошторолған, йәмғәт ҡотҡарыусыларының личный составы формалаштырылған. Мәктәптәрҙә әңгәмәләр үткәрелгән, йәйге лагерҙарҙа ял итеүсе балалар өсөн профилактик саралар ойоштороу планлаштырылған.

Рәсим Миҙехәт улы быйыл арендаторҙар тарафынан ҙур эштәр башҡарылыуына ҡарамаҫтан, тикшереү барышында етешһеҙлектәр асыҡланыуын һәм уларҙың 10 июнгә тиклем бөтөрөлөргә тейешлеген белдерҙе. Әммә Ирек Ишмөхәмәт улын отчет бөтөнләй ҡәнәғәтләндәрмәне: "Баш ҡалала рөхсәт ителмәгән нисә һыу инеү урыны бар, белһегеҙме? Ә мин беләм, сөнки уларҙа йыл һайын кешеләр батып үлә. Шуға ҡарамаҫтан, йыл һайын шул урындарға баралар. Һәм, ҡағиҙә булараҡ, үҙҙәре менән алкоголь эсемлектәре алалар. Был мәсьәләне йыл һайын күтәрәбеҙ һәм ул һәр саҡ асыҡ килеш ҡала. Калинин, Орджоникидзе, Ленин, Дим районларының рөхсәт ителмәгән урындарында һыу инеүселәргә лә контролде көсәйтергә кәрәк. Был мәсьәләне Йәмғәт именлеге үҙәге һәм полиция менән бергәләп хәл итегеҙ. Эйе, 9 йыһазландырылған пляж зонаһында барыһы ла яҡшы ойошторолған, барыһы ла һәйбәт. Әммә икенсе урындарҙа кешеләр үлә. Бына нимәлә мәсьәлә. Был хаҡта барыбыҙ ҙа хәбәрҙар, ләкин барыһын да яҡшы тип күрһәтәбеҙ.

Пляж территорияларына килгәндә, уларҙа бер ниндәй эстетика юҡ. Төркиәнең, Сочиҙың теләһә ҡайһы пляжының фотоларын алығыҙ һәм үҙебеҙҙең ерлектә шулай эшләгеҙ. Силәбелә лә пляждарҙың сифаты беҙҙекенән күпкә яҡшыраҡ. Уларҙа ла эшҡыуарҙар эшләй. Рөхсәт алғандар икән, талап итегеҙ", - тип, мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы муниципалитет башлығы. Шулай уҡ район хакимиәттәре етәкселәрен был мәсьәләгә етди ҡарарға саҡырҙы. "Юлдар, торлаҡты капиталь ремонтлау, парктар һәм скверҙар буйынса нисек эшләйбеҙ , ваҡытлы ял зоналары буйынса ла шундай әҙерлек кимәле булырға тейеш. Былтыр ҙа оперативкала шундай уҡ бурыс ҡуйғайным. Бер ниндәй үҙгәреш юҡ", - тине ул.

Ашығыс һәм ҡыҫҡа ваҡытта үткәрелһә лә, был аҙналағы оператив кәңәшмә аҡыллыға ишара булып, башҡорттоң "улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла" тигән мәҡәлен хәтергә төшөрҙө: тәнҡит һүҙҙәре сығыш яһаусыларға ғына ҡағылманы, ул залда ултырыусыларҙың барыһына ла тейҙе. Ә уның асылы шунан ғибәрәт: ҡағыҙ барыһына ла түҙә тип ҡарамаҫҡа, ғәмәлдә эшләргә кәрәк!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Республиканың ике өҫтәмә һөнәри белем биреү учреждениеһы: Мәғарифты үҫтереү институты һәм Халыҡ мәшғүллеге дәүләт хеҙмәте уҡытыу үҙәге Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы менән берләштерелә. Тейешле указға, Башҡортостан Хөкүмәте тәҡдимен хуплап, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған. Үҙгәртеп ҡороуҙы 1 октябргә тиклем тамамларға ниәтләйҙәр.

✓ Уҙған йылдың ғинуар-апреле менән сағыштырғанда, Башҡортостан халҡына бирелгән ипотека кредиттары 1,8 тапҡырға артҡан. 2018 йылдың тәүге дүрт айында банктар республикала йәшәүселәргә бөтәһе 15,8 меңдән ашыу торлаҡ ипотека кредиты биргән. Бирелгән ипотека кредиттарының суммаһы, 2017 йыл менән сағыштырғанда, теүәл ике тапҡырға күтәрелгән һәм 25,8 миллиард һумға еткән. Башҡортостанда кредит биреү ваҡыты уртаса 15 йыл тәшкил итә.

✓ Башҡортостанда сәсеү кампанияһы дауам итә. Төп бөртөклөләрҙе сәсеү тамамланды тиерлек. Республика Ауыл хужалығы министрлығының мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә бөгөнгө көнгә яҙғы культураларҙы күҙалланған 2 миллион гектарҙың 60 мең гектарында сәсергә ҡалды. Сиратта һуң өлгөргән культуралар - ҡарабойҙай һәм кукуруз. Был культуралар менән 60,6 (57 процент) һәм 5,2 мең гектар (85 процент) биләнгән.

✓ 3 июндә торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ҡағыҙҙарында коммерция рекламаһын тыйған "Реклама тураһында" законға төҙәтмәләр үҙ көсөнә инде. Был социаль рекламаға һәм белешмә-мәғлүмәттәргә ҡағылмай. Реклама тураһында ҡануниәт талаптарын үтәмәгән өсөн уны таратыусыларға административ яза янай. Компаниялар өсөн штраф күләме - 100-500 мең һум, вазифалы кешеләргә 4-20 мең һум тәшкил итә.

✓ 14-15 июндә Өфөлә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дауалау буйынса I Рәсәй-Ҡытай конгресы уҙғарыла. Халыҡ-ара медицина форумында ике мең самаһы делегат - алыҫ һәм яҡын сит илдәрҙән вәкилдәр, шул иҫәптән федераль үҙәктәрҙең төп белгестәре, федераль округтарҙың һәм Рәсәй төбәктәренең баш штаттан тыш белгестәре ҡатнаша.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АҒИҘЕЛ ЯРЫ НЫҒЫТЫЛА



**Өфөлә Ағиҙел ярын нығытыусы инженер ҡоролмаларының икенсе сираты төҙөлөшөнөң беренсе этабы тамамланды. Шул уңайҙан Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм муниципалитет башлығы Ирек Ялалов эш һөҙөмтәләре менән танышты.**

Ҡала өсөн әһәмиәтле был объект Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына бағышланған төҙөлөштәр исемлегенә инә. Яр буйын эшләү гидротехник ҡоролмалар төҙөүҙе, юлдар һалыуҙы, территорияны төҙөкләндереүҙе үҙ эсенә ала. Ярҙы нығытыусы инженер ҡоролмалары ярҙы һыу ашауҙан, ташҡын ваҡытында һыуҙың 12 метрға тиклем күтәрелеүенән һаҡлаясаҡ. Гидротехник ҡоролмаларҙың 1,2 километр оҙонлоҡтағы беренсе сираты һәм юл Салауат Юлаев һәйкәленән "Юность" бассейнына тиклем арауыҡта төҙөлөп, 2014 йылда уҡ файҙаланыуға тапшырыла. Ошо арала бында "Юность" бассейнынан Дуҫлыҡ Монументына тиклем оҙонлоғо 1 километр булған автоюл төҙөлә башлаясаҡ, күҙгөнөн инде территория төҙөкләндереләсәк.

Объект менән танышҡандан һуң, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Хөкүмәт, профиль министрлыҡтары һәм ведомстволары, Өфө ҡала хакимиәте, подряд ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында кәңәшмә үткәрҙе. Эштәрҙең ваҡытынан алда башҡарылыуы менән бер рәттән, Рөстәм Зәки улы тапшырылған участканы тотоу, тәрбиәләү буйынса ҡала халҡы ягынан ҡәнәғәтһеҙлек йыш ишетелеүенә баҫым яһаны. Тәңкит һүҙҙәрен йомшартыу, халыҡтың фекерен һынғай яҡҡа үҙгәртеү өсөн яҡын арала тырышып, һөҙөмтәле эшләргә кәрәклеген билдәләне һәм: "Беҙ ҡала халҡы, республика ҡунаҡтары өсөн цивилизациялы ял итеү урыны булдырырға тейешбеҙ", - тип билдерҙе, төҙөлөштө тулыһынса 2019 йылда тамамлау планлаштырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

# ИҢ КҮП ТАУЫШ КЕМДӘ?

**3 июндә "Берҙәм Рәсәй" партияһының алдан тауыш биреү кампанияһы үтте. Унда республика халҡы көҙгөнөн уҙасаҡ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауҙарға партиянан кандидаттарҙы асыҡланы.**

Тауыш биреүҙә ҡатнашыусылар араһында дөгөүәселек көслө була - бер урынға биштән артыҡ кандидат. 110 депутат мандаты өсөн 582 кандидат дәгүә итә, шуларҙың күпселеге - йәштәр һәм улар тауыш биреү рейтингы буйынса лайыҡлы урындарҙа килә. Мәғлүм булыуынса, Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов 5-се һайлау округында иң күп тауыш йыя. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың ғәмәлдәге депутаттары Елена Родина менән Эльвира Айытколова үҙ округтарында иң күп тауыш ала. Республика балалар клиник дауаханаһының баш табибы Рөстәм Әхмәтшин 1-се округта лидер булһа, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов 9-сы округта алдынғылыҡты бирмәй. "Өфө" Халыҡ-ара аэропортының генераль директоры Александр Андреев 10-сы округта беренсе була. Округтар буйынса тәүге ике урынды алыусыларҙың 18 процентын (20 кеше) ҡатын-ҡыҙ тәшкил итә.

# ЮЛ АҘАПЛЫ БУЛМАҺЫН...

**Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә урам-юл селтәре участкаларын капиталь ремонтлау барышы менән танышты.**

Быйыл 52 объектта дөйөм оҙонлоғо 81,5 километр булған 1 092 441 квадрат метр майҙанды ремонтлау планлаштырыла. Әлеге ваҡытта 43 участкала эш бара. Зәйнулла Рәсүлев урамында Салауат Юлаев урамынан Туҡай урамына тиклем арауыҡта юлдың иҫке ҡатламы ҡырып алынған һәм унда юғары сыҙамлы, һыуыҡҡа бирешмәүсән таш ҡушылған асфальт-бетон ҡатламы һалына. Ул һыуҙы һеңдермәй һәм тирә-яҡ мөхит тәьҫиренә бирешмәй.

Былтырғы кеүек үк, ремонтланған урамдар юл лабораторияһы хеҙмәткәрҙәренең ентекле тикшереүен үтәсәк. Әгәр һынауға алынған өлгөләр ҡәнәғәтләндермәһә, подряд ойошмаһы юлдарҙы нормативҡа ярашлы кимәлдә ҡабаттан эшләргә тейеш була. Ирек Ишмөхәмәт улы бигерәк тә проект сиктәрендә эшләнгән тротуарҙарға иғтибар бүлде. Ул шулай уҡ газондарҙың юлдарҙан бәйегерәк булмаҫҡа тейешлеген билдәләп, ҡаланың барлыҡ районларында газондарҙы яңыртыу, шулай уҡ киләһе йылдан төп юлдар менән киҫешкән өләштәрҙе лә ремонтлау бурысын ҡуйҙы. Юлдарҙы ремонтлау менән бер рәттән, проект сиктәрендә йәйәүлеләр зоналарын төҙөкләндереү, техник һыҙаттар ҡуйыу, борт таштарын гранит изделиеларға алыштырыу һәм уларҙы унайлы мөхит талаптарын күҙ уңында тотоп башҡарыу эштәре лә тормошҡа ашырыла. Тикшереү һуңында Ирек Ялалов ҡайһы бер етешһеҙлектәр булыуын, әммә уларҙың эш барышында хәл ителеүен билдәләне.

# МӘСКӘҮГӘ, ҺАБАНТУЙҒА...

**Башҡортостанда башҡорттар һәм татарҙар тығыҙ йәшәгән Рәсәй төбәктәрендә уҙасаҡ традицион һабантуйҙарҙың графигы раҫланды.**

Хөкүмәт бойороғона ярашлы, тәүге халыҡ байрамдары 16 июндә Һарытау өлкәһендә, Пермь крайының Барҙы районында, Юграның Когалым ҡалаһында үтә. 23 июндә һабан байрамын Һамар өлкәһендә уҙғаралар. Һабантуй 30 июндә - Ленинград, Свердловск өлкәләре, 7 июлдә Силәбе өлкәһе башҡорттарын һәм татарҙарын йыя. 14 июлдә байрамды Ҡурған өлкәһендә үткәрәләр. 21 июлдә дөйөм ҡала һабантуйын Мәскәү ҡалаһының Коломенск паркында ойошторалар. Башҡорт милли мәҙәниәтен һәм милли спорт төрҙәрен һаҡлау һәм үҫтереү, Башҡортостан Республикаһынан алыҫ йәшәгән ватандаштарға ярҙам итеү, төбәктәр араһында мәҙәни һәм иҡтисади бәйләнештәр булдырыу маҡсатында Рәсәй төбәктәрендә "Һабантуй" халыҡ байрамында ҡатнашыу өсөн Башҡортостан Республикаһы делегациялары йүнәлтеләсәк.

ҠЫҪҠАСА

# ЯНҒЫН ХӘҮЕФЕ БАР

✓ **Башҡортостан Урман хужалығы министрлығы мәғлүмәте буйынса, 2018 йылда төбәктә яҡынса 13 мең гектар урманды тергеҙеү күҙаллана, шуның 7 мең гектарында - яһалма ултыртыу.** Бөгөнгә урманды яһалма тергеҙеү 50 процентҡа тиерлек тамамланған. 2017 йылда төбәктә 14,6 мең гектарҙа йәш ағастар ултыртылған. Был эш сәнәғәт өсөн агас йыгыуҙы, урман янғындары килтергән зыянды ҡапларға тейеш. Мәғлүмәттәр буйынса, уларҙың һаны апрель башынан алып май урталарына тиклем уҙған йылғы күрһәткес менән сағыштырғанда өс тапҡырға тиерлек артҡан. Янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланғандан бирле урман фондында 534 гектар майҙанда 70 янғын теркәлгән. Белгестәр фекеренсә, урман янғындары һанының артыуы ҡышҡыһын ҡарҙың аҙ булыуына һәм майҙың тәүге ун көнләгөндә йыш иҫкән көслө елгә бәйле. Бынан тыш, халыҡтың, нигеҙҙә туристарҙың, һунарсыларҙың, балыҡсыларҙың яуапһыҙлығы сағылыш тапҡан.

✓ **Башҡортостан Хеҙмәт министрлығы республикала апрель өсөн эшһеҙлек буйынса уртаса пособие күләмен атаны.** Ғинуар айы менән сағыштырғанда ул бер аҙ кәмегән һәм 3 981 һум йәки эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы дәүмәленән 45 процент тәшкил иткән. Иң түбән пособие күләме хәҙер 977,5 һумға тиң, иң ҙуры - 5635. "1 майға ҡарата эшһеҙлек буйынса иң түбән пособие күләмен төбәктә - 8,1 кеше, иң ҙурын 12,4 мең рәсми теркәлгән эшһеҙ ала", - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко.

✓ **Рәсәйҙә 1 июндән 17 июлгә тиклем, 2018 йылғы футбол буйынса донъя чемпионатына хәүефһеҙлек сараларын көсәйтеү сиктәрендә, "Автобустар хәрәкәте тыйылған" тигән яңы юл билдәһе индерелә.** Билдә уртаһына автобус төшөрөлгән тыйыусы билдәләр форматындағы түңәрәктән тора. Ул муниципаль, муниципаль-ара һәм төбәк-ара даими рейстар башҡарған пассажир автобустарына ҡағыла. Тәьҫир итеү зонаһы - ҡуйылған урындан алып яҡындағы юл сатына тиклем. Билдә тирәһендә юл саты булмаған тораҡ пунктарҙа - тораҡ пункттың аҙағына тиклем. Мәғлүмәт буйынса, Рәсәйҙең Транспорт министрлығы апрель аҙағында Мәскәүгә, Ҡаҙанға, Һамарға, Санкт-Петербургка, Дондағы Ростовҡа, Түбәнге Новгородҡа һәм Сочиға автобустар индереүҙе өлөшләтә тыйыу тураһында иғлан иткәйне. Был саралар 1 июндән 17 июлгә тиклем ғәмәлдә. Йәй башынан һәм 30 июнгә ҡәҙәр Волгоград, Екатеринбург, Калининград һәм Саранск ҡалаларына автобустар индереү өлөшләтә тыйыла.

✓ **Башҡортостанда йыл башынан ипотека кредиты буйынса залогта булған 114 фатир һатыуға ҡуйылған, тип хәбәр иттеләр Федераль суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығында.** Бындай яҙмыш тағы күп граждандарға янай. Атап әйткәндә, Өфөлә йәшәүсе берәүҙең банкка 1,3 миллион һум бурысы бар. Ул Ҡулса урамында ипотекаға ике бүлмәле фатир алған, әммә оҙаҡламай кредит буйынса иғәнәне түләй алмаған. Банк уны һатып, аҡсаһын ҡайтарыр өсөн суд аша фатирҙы тартып ала. Бурыслының һәм унын ғаиләһенең берҙән-бер торлағы булыу фатирҙы ҡайтарыу өсөн ҡаршылыҡ булып тормай. Бурыслының үтенесе буйынса уға июнь аҙағына тиклем бурысын ҡапларға мөмкинлек бирелгән.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Фибриома

❖ Был мәкерле сирҙе халыҡ ысулы менән дауаларға була. Киптерелгән 4 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн термоска һалырға, 2,5 стакан бер аҙ йылытылған 90 процентлы спирт (спиртты утта йылытырға ярамай, уны һауыты менән йылы һыуға тығып алығыҙ) ҡойорға. 3 тәүлек тәнәткәс, һөҙөргә. Үҫеп ултырған алоэ гөләнән ҙур ғына бер япраҡты ҡырҡып алырға, таҙа сепрәк менән һөртөргә (йыуырға ярамай), ит турағыстан үткәрергә, 4 ҡалаҡ шыйыҡ бал өҫтәргә һәм ҡайын бөрөһө төнәтмәһенә ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡулланыр алдынан яҡшылап болғатырға. Дауаны көсәйтеү өсөн иртән төнәтмәгә сей йомортҡа, көндеҙ һәм кисен 1 ҡалаҡ аҡ май менән ҡушып ашарға була.

## Стенокардия

❖ Тигеҙ өлөштә киптерелгән гөлйемеш менән энәлек емештәре алырға. 7 ҡалаҡ емешкә 2 л ҡайнар һыу ҡойоп, урап, 1 тәүлек төнәтергә. Һөҙөргә һәм яҡшы итеп йібп, һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр сәй урынына 1-әр стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

## Дегәнәк

❖ Шәкәр диабеты ваҡытында дегәнәк тамыры төнәтмәһе шифалы. Ул ашҡаҙан, бөйөрҙәр өсөн файҙалы. 1 ҡалаҡ кипкән дегәнәк тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне өс өлөшкә бүлергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан эсергә.

❖ Яңы ғына ҡаҙып алынған дегәнәк тамырына көнбағыш, зәйтүн майы ҡойһаң, сәстәр өсөн файҙалы май килеп сыға. Дегәнәк тамырын ит турағыстан, блендерҙан үткәреп, быяла һауыттың өстән бер өлөшөнә һалып, һауыт тулғансы май ҡойорға. 3 аҙна бүлмә температураһында торғас, май ҡулланыу өсөн әҙер була.

## Невралгия

❖ Парапроктит мәлендә тигеҙ күләмдә алынған яран япрағы һәм балдан яһалған ҡатнашманы ҡулланырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ **_Беҙ, мәсәлән, мәктәпкә һәм синыф етәксеһенә бүләк алыу, күмәкләшеп фотоға төшөү өсөн генә 15 меңәр һум йыйҙыҡ. Ә белем усағын 190 уҡыусы тамамлай, иҫәпләп сығарғанда, ул тиклем аҡсаны нимәгә тотоналарҙыр?_**



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

### Ибраһим дине

Алланың Ибраһимды бөтөн йөрәгенән Аллаға бирелгән хәниф булды, тиеүе, бәйғәмбәрҙең фәҡәт Ислам динен тотоуын асыҡ һөйләй. Был йәһүдтәрҙең, христиандарҙың һәм күп аллалыҡҡа табыныусыларҙың уны үҙҙәренең динен тотҡан тигәненә ҡаршы килә.

Артабан Алла: "Аҡылһыҙ, күңеле йоҡлағандарҙан башҡа, кем Ибраһим ышанған диндән баш тартһын? Беҙ Ибраһимды әлеге тормошта һайланыҡ, ә ул киләсәктә лә беҙҙең иң тоғро бәйғәмбәрҙәрҙең береһе буласаҡ".

Хоҙай Ибраһимға: "Беҙгә бирел!" тигәс, Ибраһим: "Ендәр, кешеләр һәм фәрештәләр донъяһы Хоҙайына бирелә̄м!", тигән. Ибраһим быны улдарына ла васыят итеп ҡалдырған: "Эй, улдарым, Алла һеҙҙең өсөн һеҙ эйәрергә тейешле Бер Алла динен генә һайланы. Алла яҡлауына бирелмәй тороп, үлеп ҡуймағыҙ!" тигән. Ибраһимдың ейәне Яҡуп та быны үҙенең ейәндәренә васыят итеп ҡалдырған. Эй, йәһүдтәр, Һеҙ Яҡуп тотҡан дингә ышанабыҙ, тип раҫланығыҙ. Яҡупҡа үлем килгәндә һеҙ шаһит булдығыҙмы ни һәм ул тотҡан динде белдегеҙме? Шуны белегеҙ, Яҡуп һәм уның улдары Берҙәм Аллаға ғына ышанған мосолмандар ине. Улар һеҙҙең кеүек йәһүд тә һәм христиан да булманы. Үлем килгәс, Яҡуп улдарына: "Мин үлгәс, кемгә табынырға уйлайһығыҙ?" тип һорай. Улдары: "Һинең Аллаға, атайҙарың Ибраһим, Исмәғил һәм Исхаҡ табынған берҙәм Аллаға ғына табынасаҡбыҙ һәм фәҡәт Уға ғына биреләсәкбеҙ...", тигән.

Үҙҙәренең Изге Китабы иң яҡшыһы тип уйлаған йәһүдтәр: "Йәһүд булығыҙ, шунда ғына һеҙ хаҡ юлдан барырһығыҙ", ти. Ә христиандар: "Христиан булығыҙ, шунда ғына һеҙ хаҡ юлдан барырһығыҙ", ти. Алла: "Эй, Мөхәммәт, һеҙҙең диндәрегеҙ боҙолған, ә беҙҙең юл - Ибраһимдың юлы. Беҙ Ибраһимдың саф һәм тоғро динен аяҡҡа баҫтырған Ислам диненә ышанабыҙ, тип әйт", тигән.

### Алла Ибраһимды данлай

Алланың вәғәздәрен еренә еткереп үтәгән Ибраһимды хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ. Алла Ибраһимға: "Халыҡ өсөн мин һинән Имам, дин етәксеһе яһайым", ти. Ибраһим: "Ә минең нәҫел-нәсәбем араһында дин әһелдәре буласаҡмы?" - тип һорағас, Алла: "Иманһыҙҙарына был изге бурыс бирелмәйәсәк", - ти.

Ибн Ҡасир билдәләүенсә, Ибраһим Алла ҡушҡандарын теүәл үтәгәс, Алла унан бөтөн кешеләргә лә өлгө булып хеҙмәт итһен өсөн Имам яһай. Ибраһим Алланан үҙенең нәҫел-нәсәбе өсөн дә ошондай имамат биреүен үтенгәс, Алла уның теләген ихлас үтәй, ләкин иманһыҙҙарына бындай ҡыуанысты бирмәй.

Алла: "Аллаһы Тәғәлә Ибраһимды улы Исхаҡ, ейәне Яҡуп, ә нәҫел-нәсәбен бәйғәмбәрлек һәм Изге китап менән бүләкләне. Уның тормошона маҡтауҙар ғына яуҙырҙы. Артабанғы оҙайлы ғүмерендә Ибраһим иң тоғро диндарҙар рәтендә буласаҡ. Беҙ уға Исхаҡ, Яҡуп һәм улы Исхаҡ йөҙөндә намыҫлы вариҫтар биреп, аталары эҙенән барһын тип, һәр береһен мәрхәмәт һәм хәҡиҡәт юлына төшөрҙөк. Ә Нух менән Дауыт кеүек изгелек ҡылыусыларҙы беҙ шулай данлайбыҙ. Шулай уҡ Зәкәриә, Яхъя, Иса (Иисус), Ильяс, Исмәғил, Әл-Йәсә (Елисей) һәм Юныс менән Лут та беҙ күрһәткән иман юлынан бара. Улар беҙҙең иң тоғро ҡолдарыбыҙ булыр. Һәммәһенән дә кешеләрҙе иманға саҡырыусы бәйғәмбәрҙәр яһаныҡ", - ти.

**(Дауамы бар).**

*ӘЙТӘГҮР!*

# КЕМ КҮПМЕ АҠСА ТОТОНА?



**"Мәктәп тамамлаусы балағыҙҙы сығарылыш кисәләренә әҙерләгәндә күпмерәк аҡса тотонорға йыйынаһығыҙ?" тигән һорау менән Өфөлә йәшәүсе атай-әсәйҙәргә мөрәжәғәт иттек.**

***Әминә ИШКИЛДИНА, Өфө ҡалаһы:*** Минең ҡыҙым быйыл республика гиназияларының береһендә 11-се синыфты тамамлай. Алда - балаларҙың байрам кисәһен ойоштороу бурысы тора. Ата-әсәләргә уның күпмегә төшәсәге тураһында хәбәр иттеләр ҙә инде. Беҙ, мәҫәлән, мәктәпкә һәм синыф етәксеһенә бүләк алыу, күмәкләшеп фотоға төшөү өсөн генә 15 меңәр һум йыйҙыҡ. Ә белем усағын 190 уҡыусы тамамлай, иҫәпләп сығарғанда, ул тиклем аҡсаны нимәгә тотоналарҙыр? Ата-әсәләр комитетынан, мәктәпкә иҫтәлекле бүләк, класс етәксеһенә алтын магазинынан сертификат һатып алығыҙ, тигән фарман еткерҙеләр. Ошо тиклем ҙур сумма йыйылғас, бөтә гимназияға күптән алтын ялатылған булырға тейеш. Әйткәндәй, был суммаға байрам табынының хаҡы инмәгән, уның өсөн бер кешенән 2 мең йыйып тапшырырға тейешбеҙ. Тиҫтерҙәре кеүек, беҙҙең балалар лимузин яллап, ҡала урамдары буйлап та йөрөмәйәсәк, Өфө клубтарына бейергә лә сыҡмаясаҡ. Йыйылған аҡсаларҙан тыш, ҡыҙ баланың күлдәгенә, биҙәнеүенә әллә күпме аҡса тотонорға кәрәк буласаҡ әле. Гимназияның ата-әсәләр комитеты шулай хәл итте, тиҙәр ҙә, күпселек ата-әсәләрҙең фекерен һорашмайынса-нитмәйенсә, хәл итәләр ҙә ҡуялар шул беҙҙең уҡыу йортонда. Етмәһә, ҡайһы уҡыусының ата-әсәһе тантана өсөн аҡса бирмәй, улар байрамға килмәй, аттестатын мәктәптән генә барып ала, тигәндәр. Ә балалар бит бөтә синыф менән, иптәштәре менән бергә шатлыҡтарын уртаҡлашҡыһы, күңел асҡыһы килә.

Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа 11-се синыфты тамамлаусы балалар ғына түгел, балалар баҡсаһын, 1-се синыфты, башланғыс синыфтарҙы, 9-сы синыфты тамамлаусы балаларҙың да хушлашыу кисәләрен үткәреүҙе ғәҙәт итеп алдылар бит. Был осраҡта уҡытыусылар үҙҙәре инициатива күрһәтә күберәк.

***Наталья ИВАНЧЕНКО, Өфө ҡалаһы мәктәбенән:*** Һуңғы ҡыңғырау байрамы үтте, "Яҙғы бал"да ҡатнаштыҡ, хәҙер Берҙәм дәүләт имтихандары башланды, ә сығарылыш кисәһе 23 июндә буласаҡ. Был саралар барыһы ла әҙерлек талап итә, әлбиттә. Сығарылыш кисәһен ҡайҙа уҙғарырбыҙ, әлегә билдәле түгел, әммә яйлап ҡына әҙерләнә башланыҡ. Ҡыҙым уҡыған синыфта ни бары 13 уҡыусы, шуға ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, аҡсаны күп сарыф итмәй генә матур байрам ойошторорға ниәтләйбеҙ. Әлегә бер уҡыусы һәм бер өлкән кеше өсөн 4-әр мең аҡса йыйып тапшырҙыҡ, сараны алып барыусы яллаһалар, тағы ла күпмелер түләргә кәрәк буласаҡ. Ата-әсәләр комитеты мәктәпкә ниндәйҙер бүләк алған, беҙгә әлегә әйтмәнеләр, аҡсаны һуңынан йыябыҙ, тинеләр. Дөйөм алғанда, сығымдар саманан тыш күп булмаҫҡа тейеш.

***Гөлшат ФАЗЛИӘХМӘТОВА, Өфө ҡалаһы мәктәбенән:*** Беҙ сығарылыш кисәһендә фотоға һәм видеоға төшөрөү, тантана үтәсәк урынды һәм ашхананы ҡуртымға алыу, мәктәпкә һәм уҡытыусыларға бүләк алыу өсөн генә 15-әр мең һум йыйҙыҡ. Ҡайһы бер белем усаҡтарында был сумма 15 меңдән дә артып китә, тиҙәр. Мәктәп тамамлаусы егеттәр өсөн костюм уртаса 6 мең һум тора, ҡиммәтлерәктәре лә бар, туфлиҙар уртаса 2 мең һумға барып баҫа. Ә ҡыҙҙар өсөн күлдәктәрҙең төрлөһө бар, ябайыраҡ тегелешлеһен ҡараһаң, 3-4 меңгә лә табырға мөмкин, батша ҡыҙылай кейендерергә теләһәң, 10 меңгә лә барып баҫыуы бар. Күлдәктән тыш, әле матурлыҡ салонында биҙәнеү, прическа эшләтеүгә лә 3-4 мең һум китәсәк. Бынан тыш, ата-әсәләргә үҙҙәре өсөн дә кеҫәһенән байтаҡ ҡына аҡса сығарып һалырға тура киләсәк. Мәҫәлән, кафела бер өлкән кеше өсөн уртаса алғанда 3 мең һум йыйырға кәрәк.

Дөйөм һанағанда, сығарылыш уҡыусыһының ата-әсәһе 25 мең тирәһе аҡсаны алдан уҡ әҙерләп ҡуйырға тейеш. Уйлап ҡараһаң, ҡайһы бер ғаиләләр өсөн был сумма тулы эш хаҡын тәшкил итә. Әммә тиҫтерҙәре араһында үҙен кәм тоймаһын, тип уйлап, еңел булмаһа ла ата-әсәләр балаларын тырыштырып, байрамға әҙерләй, аҡсаһын да тапшыра. Әхлаҡ күҙлегенән был дөрөҫ түгел, әле үҙаллы тормошҡа аяҡ та баҫып өлгөрмәгән йәш кешене еңел генә аҡса түгергә өйрәтәбеҙ. Намыҫ төшөнсәһе күпме аҡса сарыф итә алыуға түгел, кешенең үҙенең холҡона, ҡылған эштәренә, йәшәү рәүешенә, кешеләргә ҡарата мөнәсәбәтенә бәйле булырға тейеш. Намыҫланып, минең балам бөтәһенән дә яҡшы күренергә тейеш, шуға ни тиклем байрамы тантаналыраҡ, затлыраҡ үтә, шул тиклем яҡшыраҡ, тип уйлаусы ата-әсәләр юҡ түгел. Йәмғиәттәге ошо ҡарашты нисек үҙгәртергәлер, белмәйем...

**Камилә ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

*ҺАБАҠТАР*

# КҮРКӘМ ХОЛОҠ - ТАТЫУЛЫҠ НИГЕҘЕ



**Медицина тикшереүе үткәндә бер-береңә сират алышып йөрөгән кеше булһа, еңелгә тура килә. Бер шулай минең артымса килгән апай менән һөйләшеп, диспансеризация үтәбеҙ. Был ҡатын, олораҡ булһа ла, етеҙ булып сыҡты. Бер юлы төрлө белгескә үҙенә лә, миңә лә сират ала, тегендә лә өлгөрә, бында ла. Ҡыҫҡа ғына ваҡытта кәңәштәрен бирергә лә форсат таба.**

- Дауаханаға ҡунаҡҡа барған кеүек иң матур кейемдәреңде кейеп йөрө, һеңлем. Бында ла, башҡа ерҙәге кеүек, матур кейемлеләргә мөнәсәбәт яҡшыраҡ, - ти.

Күргәс тә күҙгә салынғайны инде: апайҙың тырнаҡтары матур итеп буялған, һәр бармағында тиерлек - балдаҡ, битендә - макияж. Яңы танышымдың тағы бер сифаты иғтибарҙан ситтә ҡалманы: бик ғауғасыл ине. Кабинеттан сығып өлгөрмәй, хеҙмәткәрҙәрҙе әрләй башлай. Уларҙы тупаҫлыҡта, ҡаты күңеллелектә ғәйепләй, башҡа төрлө етешһеҙлектәрен дә таба.

Береһендә кабинетҡа бер юлы икебеҙгә инергә тура килде. Врач ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә өлгөрмәне, һорау яуҙырырға тотондо. Интернетта шулай яҙылған, былай тиелгән, тип, белдеклелеген күрһәтә башланы. Шуларҙан һуң, тәбиғи, врачтың да һарыуы ҡайнаны, ҡаты ғына яуап бирҙе.

Тикшереү үтеп бөткәндә ҡатын хеҙмәткәрҙәр, сираттағылар менән әрләшеп, арманһыҙ булғайны. Поликлиниканан башы ауыртыуына, күңеле болғаныуына зарланып килеп сыҡты.

Эйе, кейемгә ҡарап ҡаршы алалар. Әммә был әйтемдең икенсе өлөшө лә бар: ҡылыҡҡа ҡарап оҙаталар. Миңә бер зыяны теймәһә лә, бер-ике сәғәт эсендә врачтар ғына түгел, был апайҙың ҡылығынан мин дә арығайным. Әле генә яҡын кешеләр кеүек, бер-беребеҙгә сират алышып, ярҙам итеп йөрөгән булһаҡ, туҡталышта бөтөнләй таныш түгел кешеләр кеүек, икебеҙ ике урында автобус көттөк.

Ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк, тиһәләр ҙә, матур кейем генә биҙәмәй шул. Кешенең асылын уның холҡо, ҡылығы күрһәтә. Тәрбиәле, күркәм холоҡло булыу мөһим. Был сифаттар бөгөнгө заманда бигерәк тә кәрәк, сөнки ябай ғына әхлаҡ ҡағиҙәләрен белмәһәң дә, йәмғиәттә, коллективта ҡыйынға тура килә. Тупаҫлыҡ кешеләр араһындағы татыулыҡты емерә.

Был апай ҡупшы итеп кейенеп, үҙенә матур мөнәсәбәт өмөт итеп барған булғайны ла, үҙенең яман ҡылығы арҡаһында, киреһенсә, матур мөғәмәлә күрмәй ҡайтты. Үҙеңә яҡшылыҡ теләһәң, кешегә яманлыҡ теләмә, тигән хәҡиҡәтте белмәй ине булһа кәрәк ул...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✔ Үҙе имам булған мәсет эргәһендә З. Рәсүлев мосолман уҡыу йорто - "Рәсүлиә" исеме аҫтында билдәлелек алған мәҙрәсә аса, һәм ул тиҙ арала Рәсәй мосолмандарына белем биреүсе иң яҡшы дини институттарҙың береһенә әйләнә.



ҒАЛИМДАР ҠОР ЙЫЙҘЫ

# ДИАЛЕКТ ЛӨҒӘТЕ...

## телебеҙҙе байыта

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында төрки телдәре белгесе, филология фәндәре докторы, СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, РСФСР-ҙың Педагогия академияһы академигы Н.К. Дмитриевтың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре" XVIII Бөтә Рәсәй фәнни конференцияһы үтте. Ике көн дауамында барған сара тураһында БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, профессор Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА менән әңгәмәләштек.**




**➔ Ун һигеҙенсе тапҡыр үткәрелгән был фәнни конференцияның башлап ойошторолған йылдарын иҫкә алып үтһәгеҙ ине...**

- Диалектология фәне буйынса конференция 1956 йылда башлап үткәрелгән, тик ул саҡта "Төрки телдәр диалектологияһы буйынса конференция-кәңәшмә" тип аталған ул һәм ике-өс йылға, хатта биш йылға бер Мәскәүҙә үткәрелгән. Был конференция-кәңәшмә һуңғы тапкыр беҙҙә үткән, тик, ҡыҙғаныска күрә, төркиәтселәр комитеты етәксеһе профессор Әҙһәм Тенишев мәрхүм булғас, сара туҡтап ҡалған. Ун һигеҙ йыл элек уның уҡыусыһы, Рәсәй Фәндәр академияһы Тел ғилеме институты Урал-Алтай телдәре бүлеге мөдире Анна Дебо менән кәңәшләшеп, конференцияны беҙҙең институт нигеҙендә яңы форматта тергеҙергә килештек. Бөгөнгө көндә төрки телдәренең генә түгел, Рәсәй территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың телдәре лә өйрәнелә, шуны иҫәпкә алып, сараны "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре" тип атарға булдыҡ. Ошо йылдар эсендә конференция йәйләп киңәйҙе, башта Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән ҡатнашһалар, аҙаҡ беҙгә ҡалмыҡ, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк телдәренең диалекттарын өйрәнеүсе фән эшмәкәрҙәре лә ҡушылды. Төркиә, Япония, Венгрия илдәренән даими рәүештә ситтән тороп ҡатнашалар. Быйыл Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург, Ҡаҙан, Кудымкар, Махачкала, Сыктывкар, Ижевск, Якутск ҡалаларынан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Япония илдәренән бик күп ғилми мәҡәләләр килде.

**➔ Был юлы конференцияла ниндәй мәсьәләләр күтәрелде?**

- Башҡортостан үҙенә күрә Рәсәй диалектологтарының һәм диалектология фәненең үҙәгенә әйләнде, тип әйтергә була. Конференцияға фән эшмәкәрҙәрен генә түгел, уҡытыусыларҙы, студенттарҙы ла йәлеп итергә тырышабыҙ. Әлеге конференцияла өс секция эшләне. 1-се секцияла башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты, ғәйнә һөйләше буйынса бәхәстәр килеп тыуҙы. Башҡорт теленең үҙенсәлектәре, диалекттары күптән өйрәнелһә лә, шундай бәхәсле мәсьәләләр ҙә бар. Шуларҙы иҫәпкә алып, диалект шарттарында мәктәптәрҙә телде уҡытыу проблемаһы ла күтәрелде. Икенсе секция "Төрки диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре"нә бағышланды һәм унда башҡорт, телеңгит һөйләше, ҡаҙаҡ, татар телдәренең фонемалары, диалект һүҙҙәренә ҡағылышлы мәсьәләләр күтәрелде. Конференцияның өсөнсө секцияһы "Славян һәм фин-уғыр диалектологияһы"на арналды, уны РФА Лингвистик тикшеренеүҙәр институты филология фәндәре докторы Сергей Мызников алып барҙы. Бөтә сығыштар ҙа бик квалификациялы булды, бары тик диалект үҙенсәлектәре тураһында ғына түгел, бында социалогик проблемалар ҙа күтәрелде.

Диалектология - кабинет фәне генә түгел, ул халыҡта тыуа, халыҡтан алына һәм артабан шул халыҡ менән бергә йәшәй. Фәнни конференция йыл да ниндәйҙер яңылыҡ белергә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, быйыл РФА Тел ғилеме институты Урал-Алтай телдәре бүлеге мөдире Анна Дебо етәкселегендә эшләгән Мәскәү белгестәренең хакас теленең белтыр һөйләшенә бағышланған докладын тыңлаған минең бындағы коллегаларым шул телдә "әсәй" һүҙе барлығын ишетеп, фекер алышып ултырҙылар. Тик белтыр һөйләшендә "эче" тип яңғырай икән. Коллегаларым "әсәй" һүҙе башҡорт телендә генә бар икән, тип уйлап йөрөгән, сөнки беҙ аралашып йәшәгән төрки телле халыҡтарҙа был һүҙ юҡ. Ә бына хакастың белтыр һөйләшендә ул бар, тимәк, сағыштырып өйрәнергә, һүҙҙең килеп сығышын белергә мөмкин. Бәлки, тағы ла башҡа өҡшаш һүҙҙәр табылыр. Конференцияның пленар өлөшөндә Санкт-Петербургтан ғалим Сергей Мызников Архангель өлкәһе территорияһында фин-уғыр һәм төрки телдәренә ҡараған лексика тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән бүлеште. Уйлап ҡараһаң, Архангель өлкәһе тирәһендә ниндәй төрки халыҡ бар? Бөтөнләй юҡ, элек-электән булмаған. Ғалим, был һүҙҙәр бында ҡайҙан барлыҡҡа килгән, тигән проблема ҡуя: аралашыу арҡаһындамы, әллә көньяҡта (мәҫәлән, Мәскәү тирәһендә) йәшәгән урыҫтар аша килеп ингәнме? Бына был фәнни конференция эҙләнеүҙәр өсөн файҙалы, ғалимдарға үҙ-ара аралашырға мөмкинлек бирә, бәйләнештәр барлыҡҡа килә. Шулай уҡ ябай тыңлаусылар өсөн дә файҙалы, төрлө фән кешеләре үҙенә кәрәкле мәғлүмәт таба ала бында.

**➔ Башҡорт теле диалектологияһы фәнендә ниндәй актуаль мәсьәләләргә иғтибар итергә кәрәк тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Башҡорт теленең генә түгел, башҡа телдәрҙең дә диалекттары юҡҡа сығыу процесын кисерә. Шуға күрә, был өлкәлә иң актуаль мәсьәлә - әлегә халыҡ телендә ҡалған һүҙҙәрҙе теркәп өлгөрөү өсөн экспедициялар ойоштороу. Икенсенән, диалектологтар өсөн беҙ быйылдан башлап сығарырға ниәтләгән ғилми журналды Юғары аттестацион комиссия, Scopus халыҡ-ара мәғлүмәттәр системаһына индереп, төрлө яҡтан ошо фәнгә иғтибар йәлеп итергә теләйбеҙ. Сөнки фәндә талап шулай, мәҡәләләр рецензияланған журналдарҙа баҫылырға тейеш. Вуздарҙа диалектология буйынса айырым төркөм юҡ, уны булдырыу мөмкин дә түгел, әммә йәш кадрҙар әҙерләү зарурлығы бар. Телдәрҙе өйрәнгән, диалектология менән, ерлектәге, ырыу-ара телдәр менән ҡыҙыҡһынған кешеләрҙе йәлеп итеп, берәмләп һайлап алып әҙерләргә кәрәк. Ул эште башлағайныҡ инде беҙ, әммә ҙур эшебеҙ - һүҙлек төҙөнөк тә, нисектер, иғтибарыбыҙ һүнеп торғайны. Хатта һәр кем үҙ ауылының диалекттарын, үҙенсәлекле һүҙҙәрен яҙып барһын, тип сайт та асҡайныҡ. Байтаҡ материал да йыйылғайны, шул донъя күрһә, халыҡҡа ҡыҙыҡлы буласаҡ. Мәҫәлән, "Киске Өфө" гәзитендә "Әсәйем лөғәте" тигән рубрикала ниндәйҙер материал баҫылып сыға икән, һөйләгән кешегә лә, яҙып алыусыға ла ул мәҡәләне күреүе ҡыуаныс, шуға ул иғтибарҙы йәлеп итә. Был йәһәттән беҙ әҙәби телдә ҡулланылмаған һүҙҙәрҙе сағылдырыу буйынса гәзит редакцияһы менән берлектә лә эшләй алыр инек. Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби телдә бөтөнләй юҡ, ҡайһы берҙәре бер урында бер мәғәнәлә, икенсе яҡта икенсе мәғәнәлә йөрөргә мөмкин. Мәҫәлән, әҙәби телдә "бәпембә" тибеҙ, ә бына беҙҙең яҡтағы халыҡ телендә ул - "туҙғанаҡ". Шул уҡ ваҡытта, туҙғанаҡ һүҙе башҡа яҡта икенсе мәғәнәлә йөрөүе ихтимал. Әйтергә кәрәк, йәш быуын туҙғанаҡ һүҙен белмәй, сөнки мәктәптә улар әҙәби телдә белем ала, диалект онотола. Телде һаҡлауҙа шул бәләкәй генә шишмә баштары - диалекттарҙы өйрәнеү ҙә роль уйнай. Шуға был өлкәлә эшләйһе эштәр күп, халыҡтың йәнле теленә иғтибарҙы йәлеп итергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туған теленә ҡарата битараф булмаған кеше генә башҡа телдәрҙең яҙмышын ситтән күҙәтеп тора алмай. Н.К. Дмитриевтың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре" XVIII Бөтә Рәсәй фәнни конференцияһына тап шундай вайымлы, фәнгә мөкиббән шәхестәр йыйылғайны. Һөҙөмтәләрен көтөргә генә ҡала.**

Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Әммә иң мөһиме бына нимәлә: Зәйнулла Рәсүлевтың мәғрифәти һәм мәҙәни эшмәкәрлеге ысынбарлығында урыҫ властары сәйәсәтенең төп һәм хәл иткес тип иҫәпләнгән ҡараштарынан айырмалы ғына түгел, ә уларға ҡапма-ҡаршы булған.

Ирекҡә сығыуына бер йыл үтеүгә, З. Рәсүлев яңынан хаж ҡылырға китә һәм, ошо мөмкинлектән файҙаланып, үҙенең остазы - мөршиде Зияутдин Гумушаневи менән осраша. Хаж сәфәренән ҡайтыу менән тиерлек, Троицк ҡалаһында төпләнеп, Амур урамында күптән түгел төҙөлгән мәсеттең имамы вазифаһына тәғәйенләнә. Минзәләүи, Рәсүлевты күрә алмаусыларҙың көнсөллөгөнә ҡарамаҫтан, уның абруйы юғары булып ҡалыуы бик тиҙ арала үҙенән-үҙе беленде, тип хуплап яҙа. З. Рәсүлев ҡала мосолмандары араһында шул тиклем йоғонтолоҡ ала ки, хатта Амур урамы халыҡ телендә Исламса яңғыраған Мәғмүриә урамы тип йөрөтөлә башлай. Зәйнулла Рәсүлевтың эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Троицк ҡалаһының Рәсәй империяһы мосолмандарының төп уҡыу-уҡытыу үҙәгенә әйләнеп, Хәлидиә-Нәҡшбәндиә суфыйҙары туғанлығын киңәйтеү өсөн база булып тороуын бик әһәмиәтле факт итеп ҡарарға кәрәк.

Үҙе имам булған мәсет эргәһендә З. Рәсүлев мосолман уҡыу йорто - "Рәсүлиә" исеме аҫтында билдәлелек алған мәҙрәсә аса, һәм ул тиҙ арала Рәсәй мосолмандарына белем биреүсе иң яҡшы дини институттарҙың береһе тигән абруй ҡаҙанып, башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ балаларын үҙенә тартып тора. Һуңынанныраҡ француз тарихсыһы Александр Бенигсен, һоҡланыуын йәшермәйенсә, "Рәсүлиә - мосолман донъяһының иң яҡшы академик институттарының береһе", тип яҙа. Ҡәҙимге мәҙрәсәләр биргән белем менән хушһынмай, заманса башҡа төрлө белем алыу мөмкинлектәрен эҙләгән мосолмандар араһында урыҫ теле һәм мәҙәниәтенең йоғонтоһо көсәйә барыуы менән борсолған ҡаҙаҡ байы Алтынсарин ошо мәҙрәсәгә матди ярҙам итеп тора.

"Рәсүлиә" мәҙрәсәһенең унышлы эше нигеҙендә яңы педагогик ысулдар ҡулланыу ята. Татарҙар һәм башҡорттар араһында татар яҙма теленә нисек өйрәтеү - фонетик йәиһә ижеклэп уҡыу ысулы менән файҙаланыраҡмы, тигән һорау бер быуат буйы айырыуса күп бәхәстәр тыуҙыра (автор төрки халыҡтарының уртаҡ яҙма телен - иҫке төркиҙе татар теле, тип яҙған. - **Ред. иҫк.**). Ошоға ярашлы, яңы ысул яҡлылар "йәҙитселәр", иҫке ысулды яҡлаусылар - "ҡәҙимселәр", тип йөрөтөлөп, был атамалар бер үк ваҡытта новаторҙарҙы йә консерваторҙарҙы нарыҡлаусы термин рәүешендә ҡулланылған. 1908 йылда татар матбуғатында Зәйнулла Рәсүлев һәм Троицк ҡалаһы ғәләмдәре (мосолман ғалим-теологтары) яҙған тип иҫәпләнгән мәҡәләләр баҫыла, һәм уларҙа фонетик ысул дин ҡушҡандар менән ҡапма-каршылыҡҡа инә, тигән фекер яҡлана. Әммә шул уҡ йылдың февралендә З. Рәсүлев Троицкиҙың өс ғалимы менән берлектә, фонетик ысул "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә лә, Троицк ҡалаһының башҡа мәҙрәсәләрендә лә 1893 йылда уҡ ҡабул ителгәйне, тип, кире ҡағыу баҫтыра. Ул хатта, Ҡөрьәнде өйрәнеү дисциплиналары һәм сөннә (Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең эшмәкәрлеген һәм хәҙистәрен өйрәнеүсе фән) уҡыу курсының нигеҙе итеп алынған хәлдә, мәҙрәсә программаларын донъяуи фәндәр иҫәбенә киңәйтеүгә Троицк ғалимдары ҡаршы түгел, тип белдереү яһай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡалалар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар халҡы күп булған һәм үҙҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек ныҡ үҫешкән.*



**Инде нисәмә йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр раҫлаһа ла, Урта быуаттарға ҡараған Башҡорт ("Өфө-II" ҡаласығы) ҡалаһының йәше 1500 йыл менән билдәләнеүе, уның ысынлап булыу-булмауы ҡайһы бер тарихсыларҙа шик тыуҙыра һәм һаман да бәхәстәргә нигеҙ булып тора. Ләкин ғәрәп һәм Европа авторҙары хеҙмәттәрендә һәм карталарында билдәләнгән Башгирт, Башкерти ҡалаларының булыуын бер кем дә инҡар итә алмай. Донъя тарихы таныған ошо Урта быуат ҡалаһының булыу фактын бер төркөм ғалимдарҙың танырға теләмәүен башҡорт халҡын ғына түгел, тотош Башҡортостан халҡын ата-олатайҙарҙың тарихи мираҫынан мәхрүм итергә тырышыу, тип кенә аңлатып булалыр.**
**Беҙҙең гәзит биттәрендә "Өфө-II" ҡаласығы тарихы тураһында күп яҙылды. Әммә ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Шул ҡараштан сығып, түбәндә "Өфө-II" ҡаласығы тураһында тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың ошо тема буйынса аныҡ мәғлүмәттәр менән дөйөмләштерелгән мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

## Кем тәүге тикшереүсе?

2006 йылда Өфөнөң боронғо өлөшөндә тәү ҡарашҡа ғәҙәти булмаған ҡаҙыныу эштәре башланды. Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамдары араһындағы кварталды реконструкциялау алдынан, законға ярашлы, уны әре килеп, боронғо ҡәберлектәрҙән "алтын һәм көмөш әйберҙәр һәм һауыт-һаба ҡаҙып алыуға" борсолоуын белдерә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур экспедицияһының секретары булған рус ғалимы Петр Рычков бик күп билдәле башҡорттар менән һөйләшә. Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы

Башҡортостандың боронғологон күңел биреп тикшереүсе, Өфө ҡалаһының башлығы Дмитрий Волков (1875 - 1887 йылдарҙа башлыҡ була) "Өфө губерна ведомстволары"нда: "Беҙ, нигеҙҙә, ҡала ситендә өнһөҙ ҡурғандар: күптән юғалған халыҡтарҙың һәйкәлен - күптән инде тынған көрәш шаһиттарын тын һәм көмөш биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һаба, башҡа предметтар табыла, уларҙың күп өлөшө юғалып бөтә, бары тик ҙур булмаған бер өлөшө генә Милли музейҙа һаҡлана.

## Боронғо башҡорттарҙың баш ҡалаһы ул

Башҡортостандың Урта быуат ҡалалары тураһында үҙенең яҙмаларында XII быуаттың ғәрәп географы Мөхәммәд әл-Иҙриси: "...Эске башҡорттарҙың ҡалалары араһында Масра һәм Касра бар. Ике ҡала ла ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр унда һирәк була. Унда ерҙәренә һәм илдәренә килеп аяҡ баҫҡан сит ил кешеләрен үлтерәләр, шуға берәү ҙә килергә атлығып тормай. Ике ҡала ла Атил йылғаһына ҡойған йылға буйында урынлашҡан..." - тип яҙа.

ныҡ үҫешкән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был ундырышлы ил, унда үлән дә, мал да күп..."

Атап үтелгән ҡалаларҙың ҡайһыһы Өфөгә тап килеүе билдәһеҙ. Иң мөһиме, был яҙмалар "Өфө-II" ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыҡта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла. Боронғо башҡорт ҡалаларында металлургияның киң үҫешеүе әл-Иҙрисиҙең яҙмаларына тап килә: "...Намджан - ҡала ҡоролошо булған бәләкәй генә ҡала, уның менән төрки ҡәбиләһенән булған ир кеше етәкселек итә. Был ҡала Сукан тип аталған йылға ярында урынлашҡан. Ҡаланан көнсығышҡа табан Арджика тауы урынлашҡан, унда

# ”ӨФӨ-II” ҠАЛАСЫҒЫНА -

археологтар тикшерҙе. Ябай тикшеренеү сенсацияға килтерҙе: Өфөнөң йәше быға тиклем иҫәпләнеп йөрөлгәндән өс тапҡырға олораҡ икән: уға 1500 йыл!

"Өфө-II" ҡаласығын тәү тапҡыр 1956 йылда ошо территорияға беренсе шурфтар һалыусы Петр Ищериков асҡан, тип иҫәпләнә. Пробалы ҡаҙыныу эштәрендә ул ваҡытта әле генә Пермь университетын тамамлап ҡайтҡан йәш ғалим Нияз Мәжитов та ҡатнаша. Ул үҙенең йондоҙло сәғәтен 50 йыл көтә һәм көтөп ала - тап ярты быуаттан һуң ғына Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамындағы кварталдарҙы реконструкциялау башлана. Тап Башҡорт дәүләт университетының профессоры һәм академик Н. Мәжитов тәүгеләрҙән булып, иртә мәҙәни ҡатламдар V быуат менән билдәләнә, тип белдерә, йәғни Өфө ярымутрауы территорияһындағы биләмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай. Бигерәк тә Мәскәү белгестәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының урта быуат археологияһы төркөмө мөдире Игорь Кызласовтың эксперт билдәләмәһе баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды: "Монументаллеге һәм туҡтауһыҙ йәшәү ваҡыты буйынса ҡаласыҡтың бөтөн Көнсығыш Европала тиңе юҡ", - тине ул. Шунда уҡ уҫал теллеләр, Өфөнө 1000 йыллығын билдәләгән Ҡаҙандан күреп "ҡартайттылар", тип раҫлай башланы. Был ысынлап та шулаймы икәнлеген асыҡлап ҡарайыҡ.

## Боронғо Өфө тураһында батшалар ҙа, ғалимдар ҙа һөйләгән

1669 йылда батша Алексей Михайлович Өфөгә рус кешеҠыҙрас Муллаҡаевтың: "Ҡаҙан ханлығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем күп йылдар әүәл хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында Ағиҙел йылғаһынан үргә табан Ҡариҙел йылғаһының башына һәм йылға яры буйлап урынлашҡан тауҙарға тиклем оҙонлоғо 10 саҡырымға һуҙылған бөйөк ҡала булған", - тигән һүҙҙәрен үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда теркәп ҡалдыра. Рычков күрһәтеүенсә, Муллаҡаевтың мәғлүмәттәре 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал ваҡытында юғалған башҡорттарҙың йылъяҙмаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә.

күрәбеҙ. Йылғалар араһындағы һәм хәҙер Өфө иркен йәйелгән барлыҡ киң майҙан кеше һөйәктәре менән тулған баҫыуҙы хәтерләтә: ҡайҙа ғына күрәк тыҡма, һәр ерҙә һөлдәләр һәм һөйәктәр... Был - кеше һөйәктәре менән ашландырылған Аллаһ яланы бында ҡасандыр оҙаҡ һәм ҡаты алыш булыуын, күп кешеләр ыҙаланыуын һәм үлеүен асыҡ һөйләй", - тип яҙа.

Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) телеүҙәккә тиклемге территория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була. Бихисап ал-

Иҙрисиҙең картаһында Атил йылғаһы (йәғни Иҙел йәки Волга) Урал тауҙарынан ағып сыға, ә Касра һәм Масра ҡалалары уның уң яҡ ҡушылдығы ярында урынлашҡан. Эш шунда: боронғо грек географы Клавдий Птолемей заманынан Волганың башы тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнгән. Тимәк, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы - Ҡариҙел була.

"Эске башҡорттар"ҙан тыш, Иҙриси "тышҡы башҡорттар"ҙың өс ҡалаһын иҫкә ала: "Тышҡы башҡорттар"ға килгәндә, улар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар халҡы күп булған һәм үҙҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек

## Быны донъя

меңдәрсә кеше эшләгән баҡыр копиҙары (рудник йәки карьер - **Ред.**) бар..."

## Намджан - сауҙагәрҙәр һәм металлургтар ҡалаһы

Үкенескә күрә, Намджан картала билдәләнмәгән. Һәм ҡайҙа урынлашыуы тураһында текста яҙылыуы буйынса ул Өфөгә тап килмәй. Әммә уның тураһындағы мәғлүмәт шуныһы менән ҡыҙыҡлы: ул Урта быуат дәүерен-






**✓ "Өфө-II" ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаямы, Башҡортмо, Түрә-таумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора.**

# 1500 ЙЫЛ

## тарихы ла таный

дәге көньяҡ Урал ҡалаһының тибын һүрәтләй. Намджандың Урал йылғаһы бассейнында урынлашыуы ихтимал. Иҙриси был ҡала тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә килтерә: "Унда бик күп баҡыр табалар, уны Шаш иленең Хорезм һәм башҡа ҡалаларына һәм күрше гуздар иленә оҙаталар..." Шаш - ул Ташкент, Хорезм - Амударьяның түбәнге тамағы, гуздар хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән. Табылған баҡыр каруан юлы менән Урта Азия илдәренә ебәрелгән. Каталон атласының карталарының береһендә билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың каруан сауҙаһының бер маршруты ҡайҙалыр көнсығышҡа китә. Иҙриси был турала бына нимә тип яҙа: "...Был ҡаланан шулай уҡ йылға буйлап әл-Хәзәр диңгеҙенә төлкө һәм ҡондоҙ тиреһен сығаралар, уларҙы әл-Хәзәр диңгеҙе яры буйында һәм Дейлемда юғары хаҡҡа һаталар..." Телгә алынған әл-Хәзәр диңгеҙе - Каспий, ә Дейлем өлкәһе хәҙерге Ирандағы Каспий буйындағы Мазендаран провинцияһы. Шулай итеп, Намджан сауҙагәрҙәре Каспий диңгеҙен киҫеп сығып, уның көньяҡ ярына барып еткән. Артабан Иҙриси Намджан халҡының диңгеҙ сауҙаһы тураһында мәғлүмәттәр килтереп, уның географик урыны тураһында бер шик тә ҡалдырмай: "Был ҡалала шулай уҡ балсыҡтан яһалған әйберҙәр һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүсе, юғары сифатлы көршәктәр эшләйҙәр. Был йылға ярҙарында төрлө аҫыл таштар, лазурит, шулай уҡ был йылғала төрлө балыҡтар бар. Унда яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған ҙур балыҡтар йәшәй. Намджан ҡалаһы халҡы төрлө хәйләләр менән уларҙы еңел генә тота ала. Уларҙы күп итеп тотоп, шуның менән йәшәйҙәр, күп өлөшөн тоҙлайҙар һәм һуңынан Хазар диңгеҙенә сығасаҡ караптарына килтерәләр. Улар ошо диңгеҙҙән яр буйлап баралар һәм Итиль ҡалаһына эләгәләр, унда балыҡтарын һаталар һәм үҙҙәре лә ашайҙар..." Текстан күренеүенсә, Намджанда йәшәүселәр "башҡорттарҙан хазарҙарға" йылға юлын үҙләштерә. Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап аҫҡа судноларҙа төшкәндә улар Каспий диңгеҙенең акваторияһына сыға. Һуңынан, уның яры буйлап көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, Волганың дельтаһына барып етеп, йылға буйлап үрләп Хазарияның баш ҡалаһы Итиль ҡалаһына барып сығалар. Унда улар аҫыл таштар, йәнлек тиреһе һәм тоҙло бикре һата. Иҙрисиҙең тексына һәм картаһына ярашлы, Намджандың Башҡортостандың көньяҡта Эмба йылғаһы һәм Ҡаҙағстан өлкәһенең Мугоджар тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан тарихи территорияһында урынлашҡан булыуын күрәбеҙ. Был ҡаланың Яйыҡ йылғаһы баш алған Арҡайым заманынан алып баҡыр табыу эштәре алып барылған Урал тауҙары эргәһендә урынлашыуында шик булыуы мөмкин түгел. Иҙриси яҙмаларын өйрәнеүсе Ирина Коновалова Намджан ҡалаһын хәҙерге Орск районы тирәһенә урынлаштыра.

### Ҡараҡая ҡалаһы хәҙерге Өфөгә тап килә

Иҙрисиҙең картаһы буйынса, Өфөгә бигерәк тә Ҡараҡая ҡалаһы тап килә. Ул Атил, йәғни Ағиҙел йылғаһына ҡойған, уның уң яҡ ҡушылдығы Ҡариҙелде хәтерләткән урында билдәләнгән. Дөрөҫ, Өфө тип күҙалланған Ҡараҡая ҡалаһы хаталыҡ менән Ағиҙелдең уң яҡ түгел, һул яҡ ярында урынлаштырылған. Бында, әлбиттә, бер ваҡытта ла Башҡортостанда булмаған авторҙы ғәфү итергә мөмкин. Иҙриси: "Ҡараҡая - ағас өйҙәрҙән һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала, - тип яҙа. - Булғарҙар уларҙа даими баҫымсылыҡ яһап тора. Уларҙың араһы - 16 аралыҡ һәм улар араһында даими туҡтауһыҙ һуғыш бара..." Әгәр бер көнлөк аралыҡты 40 километр тип алғанда, Ҡараҡая ҡалаһы һәм булғарҙар араһы 640 километр тәшкил итә. Был Өфө менән Татарстандағы хәҙерге Булғар ҡалаһы араһына яҡын. Шулай итеп, "Өфө-II" археологик ҡомартҡыһы Иҙриси үҙенең яҙмаларында яҙған Ҡараҡая ҡалаһына ниндәйҙер кимәлдә тап килә, тип раҫларға мөмкин.

XIII быуатта Башҡортостан Алтын Урҙа составына инә. Мәғлүм булыуынса, монгол хандары, ҡағиҙә булараҡ, яулап алынған илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылмай, уларҙан бары тик яһаҡ түләүҙе һәм кәрәк булғанда һуғыш алып барыу өсөн ҡораллы ополчение ғына талап итә.

### Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр

Көнсығыш Европаны берҙәм дәүләткә берләштергән Алтын Урҙа дәүерендә уның территорияһы буйлап сәйәхәт итеү быға тиклем булған быуаттарға ҡарағанда киң тарала. Батый батшалығына бөтөн донъянан сауҙагәрҙәр килә, ә генуэз негоцианттары Урҙала йәнлек тиреһе һәм бик күп сауҙа фактураһы табыуға концессияға эйә була. Күрәһең, тап уларҙың мәғлүмәттәре буйынса 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу урыны аныҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә. Пашкерти тағы ла анығыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркаторҙың атласы 1595 йылда автор вафат булғас донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай.

XIV быуаттың ғәрәп ҡамуссыһы Ибн Халдун Алтын Урҙаны һүрәтләп, былай ти: "Үрҙә Сыңғыҙхан ошо дәүләткә нигеҙ һалыусы, уның Душы-хан (Джучи) исемле улы бар һәм ул батша, тип белдерелгәйне. Был батшалыҡ төньяҡта Хорезмдан Яркенда, Соғда, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башкурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡтың сигендә Ширван ҡалалары араһында Баҡы һәм уның эргәһендә Демир Капу (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар".

Нияз Мәжитов фекеренсә, атап үтелгән пассажда Башҡорт ҡалаһы, йәғни көнбайыш Европа карталарындағы Пашкерти ҡалаһы телгә алына. Урта быуаттарҙа ҡаланың этник өҫтөнлөклө халыҡ атамаһы буйынса йөрөтөлөүе ғәжәп түгел. Волга Булғарының баш ҡалаһы ул ваҡытта Булғар тип аталыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул ваҡыттағы биләр ырыуының Биләр тип аталған ҡалаһы була. Хәҙерге сыуаштарҙың ата-олаталары булған сувар ырыуының Сувар тигән ҡалаһы була. Мордва-мокшаларҙың Мокша ҡалаһы була. Н. Мәжитовтың оппоненттары сығанаҡтарҙа биләмә түгел, ә Башҡортостан тигән географик атама тураһында һүҙ бара, тип, Башҡорт ҡалаһының булыуын инҡар итә. Уларҙың кеме хаҡлы икәнен ваҡыт күрһәтер. Әммә Урта быуат Башҡортостанда ҡалаларҙың, шул уҡ Намджан ҡалаһы булыуы факты - шикһеҙ. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаямы, Башҡортмо, Түрәтаумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора. Уның сәскә атыу осоро VII-XII быуаттарға тура килә. Монгол баҫмасылығы һөҙөмтәһендә ҡала яйлап бөтә бара. Һуңғы һөжүмде уға 1389 йылда Башҡортостан буйлап ут һәм ҡылыс менән үткән Тамерлан яһай.

Һығымтала "Өфө-II" ҡаласығының фәнни әһәмиәте буйынса эксперт советының 2007 йылда ҡабул иткән резолюцияһынан өҙөмтәләр килтерәйек:

1) "Өфө-II" ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артындағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә, был факт һәйкәлде Көнсығыш Европалағы шуға оҡшаш һәйкәлдәр араһында айырып тора.

2) Ҡаҙыныу һөҙөмтәһендә асылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына ҡарай. Ҡаланың һаҡ өсөн тәғәйенләнгән диуары һәйкәл эшләгән осорҙоң иртә этабында төҙөлгән, алдан күҙалланған проект буйынса күтәрелгән һәм үҙаллы үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булыуын раҫлай.

Шулай итеп, Эксперт советы ағзалары билдәләр комплексы буйынса беҙҙең эраның IV-XV-XVI быуаттарына ҡараған "Өфө-II" ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтендә шикләнмәй. Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.

Эксперт советы ағзалары: Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, профессор, ТР Фәндәр академияһының баш ғилми хеҙмәткәре Ф.Ш. Хузин (Ҡаҙан); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының Урта быуат археологияһы төркөмө мөдире, профессор, тарих фәндәре докторы И. Л. Кызласов (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Сүрия археология экспедицияһының начальник урынбаҫары, тарих фәндәре докторы Ш. Н. Әмиров (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының һаҡланыусы ҡаҙылмалар бүлегенең Мәскәү эргәһе экспедицияһы начальнигы урынбаҫары, археометаллургия буйынса халыҡ-ара төркөм ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина (Мәскәү).

Эксперт советының резолюцияһына Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, академик Н. А. Макаров ҡултамғаһын һала. Йәғни илдең әйҙәүсе археологтары "Өфө-II" ҡаласығын донъя әһәмиәтендәге һәйкәл тип таный, ә Башҡортостандың ҡайһы бер тарихсылары - юҡ. Уларҙың ҡайһыһы шарлатан - үҙегеҙ һығымта яһағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.




**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

*РУХИӘТЕБЕҘ ӨЛГӨҺӨ*

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

## сер һәм мәғлүмәт сығанағы ла ул

**Төрлө ғилми хеҙмәттәрҙә башҡорт костюмы халыҡтың үҫеше, уның төрлө тарихи дәүерҙәрҙә башҡа халыҡтар менән мәҙәни һәм сауҙа бәйләнешен өйрәнеү объекты булараҡ сығыш яһаһа ла, милли кейемдең үҙе, уның төҙөлөшө тураһында телгә аҙ алына. Әммә тап ошонда ҡиммәтле мәғлүмәт һаҡлана ла инде. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, "Ҡара юрға" эпосында Мәсем хандың ҡыҙы Маҡтымһылыу Әбләйҙең кейеменә ҡарап, уның ҡайһы тарафтан килеүен әйтеп бирә. "Сабыуың түңәрәтеп яһалған, дала кешеһенә оҡшағанһың", - ти ул атаһының Ағиҙел үрендә урынлашҡан йәйләүенә Һаҡмар йылғаһының көньяҡ ярҙарынан килгән егеткә. Тимәк, башҡорт кейеме матур, уңайлы булыуынан тыш, берәй төрлө мәғлүмәт тә еткерә алған. Күпме йылдар үтмәһен, башҡорт костюмының бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған өлгөләре һаман да үҙенең матурлығы менән күҙҙе ҡамаштыра. Унда бөтөн нәмә гармонияла, уның бөтөн өлөштәре берҙәм бөтөнлөктә тәшкил итә.**

Философик күҙлектән ҡарағанда, кейемдә тормош гармонияһы булып ике - ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет башланғысының үҙ-ара ярашыуы тора. Тотороҡлолоҡ, үҙ һүҙеңдә тора белеү, аналитик фекерләү, һалҡын иҫәп, йәғни, ир-егет башланғысы кейемдең нигеҙендә - төҙөлөшөндә күренә. Хис-тойғоларға бай булыу, башҡаларҙың хәленә инә белеү, йәлләү менән айырылып торған ҡатын-ҡыҙ башланғысы кейемдең төҫөндә, биҙәктәрендә, биҙәнеү әйберҙәрендә сағыла.



Бөгөнгө көндә Башҡортостан музейҙарында һаҡланған, XIX быуат аҙағы-XX быуат уртаһында тегелгән милли кейемдәрҙе тикшергәндән һуң, ҡатын-ҡыҙ күлдәктәрен бер нисә төргә бүлеп була. Уның иң боронғолары, башлыса өйҙә, ҡул көсө менән һуғылған, киңлеге 30 см-ҙан ҙурыраҡ булған туҡымаларҙан тегелгән. Күлдәктең итәге менән өҫкө өлөшө тоташтырып тегелгән урында магазин туҡымаһынан киң генә әүеркә һалынған. Бындай кейемдәр туҡыма һуғыу киң таралған төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондарҙа тегелгән.



Өҫкө яғы өс - арҡа һәм ике алғы өлөштән, итәге бер нисә ҡыйыҡтан торған күлдәкте төньяҡ һәм көнсығыш райондары кейгән. Биле аҫҡа төшөп торған күлдәктәр Урал арьяғы башҡорттары өсөн хас булған.

Төньяҡ-көнсығыш райондарҙың күлдәктәре ең формаһы менән айырыла, ул ҡабарып тора. Шулай уҡ еңде төрлөсә ултырталар.

Яға башлыса ике төрҙә: ултырма яғалы күлдәк һәм яғаһы төшөрөп ҡуйылған күлдәктәр булған. Төймәләр йә алдан, йә арттан, йә яурынға ҡуйылған.

Башҡорт алъяпҡыстары ла төрлөлөгө менән айырылып тора. Әйткәндәй, башҡорт кейеме составында алъяпҡыстар бөтөн ерҙә лә осрамай, мәҫәлән, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ул юҡ. Был төбәк халҡының XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем төп шөғөлө малсылыҡ булған. Тимәк, улар даими рәүештә күсмә тормош менән йәшәгән. Ә алъяпҡысты йорт эштәре менән булышҡанда таҡҡандар.

Камзулдарға килгәндә, был еңһеҙ кейемдең алғы өлөшө тура төшә, ә артҡы өлөшө арҡаға һылашып ҡына төшә лә, бил тирәһендә киңәйә, бының өсөн махсус рәүештә ҡабырға йөйөн арҡаға сығарыбыраҡ тегәләр.

Иң ҡыҙығы, ошондай бесеү принцибы тарихи кейем өлгөләрендә, атап әйткәндә, XVII-XVIII быуаттарҙа Францияла осраған жустокорптарҙа осрай. Француз кафтаны камзул өсөн өлгө була аламы, юҡмы, был мәсьәлә асыҡ ҡала, әммә 1812 йылдарғы һуғышта Парижғаса еткән ата-бабаларыбыҙ уларҙы трофей итеп алып ҡайтмаған тимә.

**Халыҡ сәнғәтенең һәр өлгөһөндә лә биҙәүҙәр киң ҡулланыла. Боронғо кешеләрҙең тормошонда биҙәктәр ҙур роль уйнаған, улар кешене яуыз көстәрҙән һәм күҙҙәрҙән һаҡлаған, ниндәйҙер йола үтәү өсөн кәрәк булған, хужаһының социаль статусын күрһәтеп торған. Биҙәктең һәр элементы һаҡлау ролен үтәгән.** Хәҙерге заманда тәндә "яуыз көстәр"ҙән һаҡлау кәрәклеге юғалған, сөнки уларға ышаныу юҡҡа сыҡҡан. Шулай ҙа бөгөнгө көндә һаҡлау төшөнсәһе әһәмиәтен юғалтҡан тип тә әйтеп булмай, ул икенсерәк кимәлгә күскән. Бөгөн "энергетик вампир", кешене һаҡлап тороусы ҡатламдар, мәҫәлән, аура тигән терминдар ҡулланыла. Йәғни, элек кешенең йәне һаҡлауға мохтаж булһа, бөгөн тәндең энергетик ҡатламы һаҡлау объекты булып тора. Шуға ла кейемдең "һаҡлаусы" өлөштәре лә үҙгәрҙе, заманса костюмда насар кешеләрҙең энергетикаһынан ауралы һаҡлау өсөн ювелир биҙәүестәренә, бетеүҙәргә, төҫтәргә күберәк иғтибар бирелә. Әммә боронғолар ҡурҡыныс янаусы әйберҙәргә күберәк мистик төҫ биргән, улар кеше күҙенә күренмәй һәм хатта кейем аша ла кешенең йәненә үтеп инә ала, тип иҫәпләгән. Кейемдең иң "йомшаҡ" ере тип йыртыҡтар, тегелгән урын иҫәпләнгән. Шуға бындай урындарҙы биҙәгәндәр ҙә. Милли кейемдә яға, түш киҫелеше, итәктең һәм еңдең осо биҙәлгән. Башҡорт күлдәгендә бигерәк тә уның өҫкө өлөшөнә иғтибар биргәндәр. Ошо маҡсатта түш уйымы тәүҙә сигелгән түшелдерек менән ҡапланған. Һуңғараҡ түш уйымын сигеп биҙәгәндәр, ул иҙеү тип аталған. Хәҙерге фәндә милли костюмды философтар ҙа өйрәнә. Кейем һаҡлаусы ролен үтәүҙән тыш, матур биҙәктәр кешелә тик ыңғай тойғолар ғына уятҡан. Матурлыҡты күрә белгән кеше иһә, яуызлыҡ ҡылмаясаҡ. Шуға ла биҙәктәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте лә юҡ түгел.

Донъя өс өлөштән тора, тип иҫәпләгән ата-бабаларыбыҙ. Иң юғары баҫҡыста - Һауа, унда Тәңре йәшәй. Көн (Ҡояш), Ай, уларҙың ире Самрау; Тимер Ҡаҙыҡҡа бәйләнгән Һарат менән Буҙат һәм уларҙың артынан ҡыуыусы алты ас бүре лә Күктә. Уртансы ҡатлам - Ерҙә кеше, уның ярҙамсылары Толпар, йәнлектәр, ҡоштар (шоңҡар, торна, аҡҡош, күгәрсен), шулай уҡ ей, тау, урман, ут эйәләре йәшәй. Ер йәки һыу аҫты - төрлө ғифриттәр, һыу эйәләре, Сәмрегош һәм башҡа йәндәр донъяһы. Улар, үҙ сиратында, изге (Аҡбуҙат, торна, балыҡ) һәм яуыз (дейеү, ауырыу эйәләре һ.б.) һәм бер кемгә лә зыян килтермәгән (тау, йылға эйәләре) көстәргә бүленә.

Донъяның ошондай бүленеше матди мәҙәниәт предметтарының барыһында ла, шул иҫәптән торлаҡта, көнкүреш әйберҙәрендә, кейемдә сағылыш тапҡан. Милли кейемдә өҫкө донъя баш кейеме һәм арҡаның өҫкө өлөшө кимәлендә сағыла. Баш кейемдәре ҡоштарҙы ла хәтерләтеп ҡуйған, ә ҡоштар иһә һауаның, яҡтылыҡтың, тормоштоң күҙалланышы. Ҡашмауҙы ғына алып ҡарайыҡ. Уның алғы өлөшө ҡоштоң суҡышы, арҡала ҡойроғо, алға төшөп торған биҙәүестәр ҡоштоң ҡанаты. Әйткәндәй, ҡолаҡ эргәһенән аҫҡа ҡарай төшөп торған сулпылар күп халыҡтарҙың баш кейеме өсөн хас.

Урта донъя арҡаның өҫкө өлөшөнән кейемдең итәгенә тиклем сағыла һәм ул Ерҙең үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһының байлығын һәм матурлығын күрһәтә. Сигеү, аппликация ярҙамында кейемдең ошо өлөшө үҫемлектәр, сәскәләр, йәнлектәр һыны менән биҙәлә. **Түбәнге донъя - күлдәктең аҫҡы өлөшө, шулай уҡ аяҡ кейеме. Был донъя кешене ҡурҡыта, ундағы яуыз көстәр кешенең ғүмеренә, сәләмәтлегенә зыян килтерә, тип ышанғандар. Бигерәк тә йәш ҡатындарҙың кейеменә иғтибар бирелгән, сөнки милләттең киләсәге улар тыуҙырған һәм тәрбиәләгән һау-сәләмәт быуындың ҡулында. Шуға ла ата-бабаларыбыҙ ҡыҙҙарҙың һәм йәш ҡатындарҙың һаулығын һаҡларға тырышҡан. Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙың кейеме ниндәйҙер мәғәнәгә эйә булған төрлө биҙәктәргә бай.**





Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, аяҡ кейеме - сарыҡтың үксә өлөшө аппликацион биҙәк менән байытылған аркалар менән биҙәлгән. Биҙәктең төҫө лә үҙенсәлекле, ул, ғәҙәттә, ҡыҙыл ептәр һәм ҡыҙыл төҫтәге туҡыма киҫәктәренән яһала, ә ҡыҙыл төҫ һәр замандарҙа ла һаҡлаусы функцияһын үтәгән. Икенсенән, бындай композиция тоннелгә инеү йәки унан сығыуҙы хәтерләтә. Гүзәл Ҡазбулатова иҫәпләүенсә, боронғо кешеләр тормоштоң яралыуын шулай ҡүҙаллаған. Икенсе донъяға үҙенсәлекле юл булараҡ ҡаралған түбән донъялағы был "ишекте" яһап, уны биҙәүҙең төп маҡсаты нәҫел-ырыуыңды һаҡлау, был донъяға яуыз көстәр үтеп инеүенә юл ҡуймау.

Түбәнге донъя менән йылға һәм күлдәргә мөнәсәбәт тә бәйле. Боронғо башҡорттар һыуға ике төрлө ҡараштa булған. Бер яҡтан, һыу - йәшәү сығанағы, икенсе яҡтан - һыу үҙенең юлындағы бөтөн нәмәне емерә ала. Башҡорттарҙың һыуға бындай мөнәсәбәте "Урал батыр" эпосында ла күренә. Урал батыр эскән күлдең һыуында көн күргән дейеүҙәр уны һәләкәткә килтерә, Урал батыр, күлдең һыуын эсмәгеҙ, тип кәңәш итә. Тик ерҙә эсәр һыу етмәй башлағас, кешеләр уның улдарына килеп, ярҙам һорай. Шул саҡта улар булат ҡылыстары менән тауҙы уйып, Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар тигән йылғаларға баш бирә. Башҡорттарҙың кейемендә йылғаны күлдәктең итәгенә тегелгән таҫма һынландыра. Таҫма урта һәм түбәнге донъя сигендә, был да халыҡтың һыуға мөнәсәбәте тураһында һөйләй.

Милли кейемдә кешенең социаль йәки ғаилә хәленә бәйле элементтар ҙа бар. **Мәҫәлән, кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ ғына ҡашмау кейә алған. Иң тәүҙә баш кейеме күрһәткән торған ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә хәлен. Кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейеме, башлыса, ҡашмауы ромб формаһындағы биҙәктәргә бай булған. Ромбтың оҙонса түңәрәктең эсенә урынлаштырыуы ла ихтимал. Оҙонса түңәрәк - йәшәйеш символы. Уның ромбҡа әүерелеүе - Ер менән Һауаның, ир менән ҡатындың ҡушылыуын аңлата.** Йәшәйештең нигеҙе һәм асылы. Шуға ла ромб кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейемендә генә осрай. Ә йәш ҡыҙҙар толом башланған ергә өсмөйөш ҡуя, был уның кейәүҙә булмауы билгеһе. Бүрәттәрҙә, мәҫәлән, ҡыҙҙың кейәүгә сығырға әҙерләгген билбау урынына билде уратып алған декоратив биҙәк күрһәтеп тора. Тывалар итәк осона ошондайыраҡ биҙәкле тар туҡыма тегеп ҡуялар. Бөтөн был миҫалдар милли кейемдең халыҡ, уның донъяға ҡарашы тураһында мәғлүмәт йөрөтөүен күрһәтеп тора.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**

**"Башҡорт костюмы" китабынан.**

АФАРИН!

# САЛАУАТ ИСЕМЕ БЕҘҘӘ ГЕНӘ...




**Ошо көндәрҙә Салауат районында милли батырыбыҙҙың тыуған, һуңынан батша карателдәре тарафынан яндырылған Тәкәй ауылында төҙөлгән Таштирмә эсенә Салауат Юлаев хөрмәтенә иҫтәлекле таш ҡуйылды. Ошо хаҡта ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнап йөрөгән "Арғымаҡ" этно-төркөмө етәксеһе, Башҡорт йәштәренең Бөтә Рәсәй ҡоролтайы рәйесе Ринат РАМАҘАНОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

➔ **Таштирмәлә батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа иҫтәлекле таш ҡуйыу идеяһы кемдең инициативаһы буйынса тормошҡа ашырылды?**

- Был эш ике йыл элек Башҡорт йәштәренең Бөтә Рәсәй ҡоролтайы, Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының йәштәр бүлеге, "Салауат варистары" ойошмаһы, Салауат районының Әлкә ауыл советы инициативаһы менән башланғайны. Ошо осорҙа бер ни тиклем тотҡарлыҡтар, аҡса проблемаһы килеп тыуһа, һуңғы ваҡытта бөтөн нәмә ыңғай ғына килде, мин уны Хоҙай Тәғәләнең хикмәте, тиер инем. Был ваҡиға бер үк ваҡытта бер нисә сараны берләштерҙе. Сөнки шул көндә районда "Йөрәк иҫләй..." спорт фестивале үтте. Ул хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, спорт ҡаҙаныштары күрһәткән ваҡытта һәләк булған спортсыларҙың иҫтәлегенә бағышланды. Фестивалдә республиканың туристик, эҙәрмәнлек, хәрби-патриотик клубтары, секциялары, түңәрәктәре, берләшмәләренең 12-18 йәшлек тәрбиәләнеүселәре ҡатнашты. Шулай уҡ был көндө Салауат районында баш дирижеры ошо район егете Азат Шаһмөхәмәтов булған Рәсәй Милли гвардияһының өлгәлә-күрһәтмә симфоник оркестры сығыш яһаны. Беҙ Салауат Юлаев мәмерйәһендә лә ошо оркестр менән дә сығыш яһаныҡ. Был сысын мәғәнәһендә йәштәрҙе гражданлыҡ-илһөйәрлек рухында тәрбиәләү сараларының береһе булды. Быға тиклем оркестр менән уйнарлыҡ сығыштарыбыҙ бар ине, уларҙы беренсе тапҡыр Салауат тәйәге ишетте.

Иҫтәлекле таш ҡуйыуға килгәндә, был бигерәк тә үҙебеҙгә кәрәк. Балалар унда барып тарих менән осраша, шунда тыуған батыр эҙҙәренә баҫып йөрөп, ошо ерҙән көс, дәрт, дарман ала, тыуған еренә һөйөү арта. Мәҫәлән, иҫтәлекле ташты асыуға Әлкә урта мәктәбе балалары килгәйне. Бер бәләкәй генә малай шиғыр һөйләгәндә күҙ алдында үҫеп, ҙурайып китте. Үҙенән шундай ҡеүәт килә. Күҙҙәре яна. Әйтерһең дә, бөркөт килеп ҡунды. Киләсәктә лә был ер халыҡтың рухын ҡайтарырлыҡ урын булып торор тип өмөтләнәм. Батырыбыҙҙың исеме быуаттар аша әле булһа башҡорттарҙы ғына түгел, төрлө милләт халыҡтарын берләштерә, әле булһа Салауат рухы яңыра тора. Батырҙары ла тыуыр, иншалла.

➔ **Башҡарған эшегеҙ - ҙур ғәмәл, уны атҡарып сығыуға финанс сығымдарын нисек хәл иттегеҙ?**

- Иҫтәлекле таштар ҡуйыу менән шөғөлләнгән "Камнеград-Уфа" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры Ришат Ваһаповҡа мөрәжәғәт иткәйнем, хәл итербеҙ, эшләрбеҙ тине. Артабан Сибайҙағы "Башгранит" (Коцуба Павел Юрьевич, Сергей Малкин) йәмғиәтенә сығып, улар гранитты әҙерләп, беҙ Өфөгә алып ҡайтып, гравюралар эшләтеп, алып барып ҡуйҙыҡ. Шулайтып, төрлө яҡтан ярҙам булып торҙо. Ҡуйғанда инде атайым ныҡ ярҙамлашты. Атайым, мин, Салауат районы егете, йырсы Айгиз Ханов бергәләшеп урынлаштырҙыҡ, урындағы егеттәр ҙә булышты.

➔ **Салауат Юлаевтың тыуған, һуңынан яндырылған ауылы нигеҙендә булғанһығыҙ. Ошо изге урында ниндәйҙер икенсе рух тойҙоғоҙмо, ғөмүмән, ниндәй кисерештәр солғанышында йөрөнөгөҙ?**

- Сәнғәт менән шөғөлләнәм, ҡурайҙа уйнайым бит инде, үҙемә шундай һорау бирә башланым: ни өсөн мин ҡурайҙа уйнайым, ни өсөн башҡа һөнәр эйәһе түгелмен? Шул һорауға яуап эҙләй башлағанда яйлап-яйлап ҡына булмышымда ниндәйҙер яңы тормош уянып китте, донъя мәғәнә менән тулды. "Аллаһ юлында үлгәндәрҙе үлгән тип әйтмәгеҙ, улар иҫән, тик һеҙ һиҙмәйһегеҙ", тиелгән ошо ташта яҙылған аят сүрәһендә. Салауат та был донъянан шәһит булып китә. Тимәк, улар тере рух булып беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй. Йөрәктә халҡым, ерем, диҥем, телем тип ялҡынланып йөрөгән, шундай ихлас, иманлы, тәрән аҡыллы, ғилемле, иҫ китмәле бөйөк шәхескә бөйөк ихтирам һәм һөйөү уяна икән, һин уның рухын тоя башлайһың. Ҡайҙа ғына булһам да, ниндәй генә сәхнәгә сыҡһам да, уйланам. "Эй, Аллаһы Тәғәләм, мин ошо сәхнәгә сығам, ошонда минең халҡым. Улар ҡурай моңон тыңларға, мәҙәниәтебеҙҙе, боронған ҡалған йырҙарҙы, ҡобайырҙарҙы тыңларға килгән, миңә ошо йырҙарҙы ихлас итеп башҡарырға көс-ҡеүәт, үҙеңдең бөйөк һүҙеңде уларға ошо моң аша еткереү мөмкинлеге бир. Атай-олатайҙарыбыҙ, батырҙарыбыҙ, ишандарыбыҙ нимә тип әйтер ине икән ошо йыйылған халыҡҡа? Инде мин һөйләмәйем, минең телем менән батырҙарым һөйләһен, минең ҡурайым аша халҡыбыҙҙың бөйөк шәхестәре үҙҙәренең һүҙен еткерһен. Сығыш яһағанда егеттәребеҙгә ҡеүәт бир, батырҙарыбыҙ менән рухи бәйләнеш бир. Беҙҙең моңобоҙ аша уларҙың йөрәге уянһын, ата-бабаларыбыҙҙың васыяты уларға барып етһен, халҡыбыҙ үрсеп китһен, ҡеүәт, иман, нур ҡайтһын. Ошо сараларҙы үткәрергә ярҙам ит", - тип сәхнәгә сығам һәм... артыма бөтөн батырҙарыбыҙ теҙелә. Хатта тотош бер ғәскәр тынын тойғандай булам. Ҡурайҙың беренсе нотаһарын уйнау менән осоу тойғоһон кисерәм, тәнемдәге барлыҡ күҙәнәктәрем уяна. Бөтөн күңелем менән тулып уйнап ебәрһәң, бер кеше лә битараф ҡалмай. Шуға күрә Салауаттың тыуған ерендә бындай тойғо, әлбиттә, сағыуыраҡ, көслөрәк тойола. Уны әйтеп аңлатырлыҡ түгел.

➔ **Һеҙҙең өсөн кем ул Салауат?**

- Салауат - ул доға тигәнде аңлата. Ул ябай исем генә түгел, ә процесс. Юҡҡа ғына салауат әйтеү, тимәйҙәр. Биш намаҙ һайын бер мосолман донъяһы һигеҙ салауат әйтә. Шул бөйөк ғәмәлде башҡорт ҡына улдарына исем итеп ҡуша. Башҡа халыҡтарҙа ул исем юҡ. Халҡыбыҙҙа булған Салауат исеме милләтебеҙҙең телгә, диңгә, Бәйғәмбәребеҙгә һәм Аллаһы Тәғәләгә ҡарата мөнәсәбәтен аңлата. Күңелендә ошо исемде (доғаны) йөрөтһәң, бөтә юлдар, ишектәр асылып тора, бөтөн эштәрең уңышлы була, бер нәмәнән ҡурҡмайһың, бер нәмә алдында ла аптырап, юғалып ҡалмайһың. Йәғни салауат - ул Аллаһы Тәғәләгә, глобаль тормошҡа асыҡ ҡапҡа. Шундай мөнәсәбәт менән беҙ ҙур ихласлыҡ һәм тырышлыҡ күрһәтеп, ташты Бәрәкәт төнөндә ҡуйҙыҡ. Аҙан әйтеп, иртәнге намаҙҙы уҡып, эштәребеҙҙе теүәлләп ҡайтырға Хоҙай насип итте.

➔ **Рәсәйҙең башҡа ерҙәрендә, шулай уҡ күрше Татарстанда йәйәүлеләр өсөн төрлө маршруттар эшләнә. Салауат районында Рәсәйҙә икенсе булып геопарк барлыҡҡа килде. Бер ыңғай, "Салауат эҙҙәре буйлап" тигәнме, әллә башҡа атама менәнме, мосолмандар, йәғни диндарҙар өсөн маршрут булдырыу планы юҡмы?**

- Беҙ был йүнәлештә лә уйлайбыҙ, эштәр алып барабыҙ. Башҡортостан буйлап изге урындар ифрат та күп. Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса комитеты менән берлектә бер-ике йыл элек ошо эш башланды. "Йәшел маршрут" тип атала ул һәм Рәсәйҙең эске туризм маршруттары реестрына индерелде. Унда бер нисә көс сығанағы, шишмәләр, мәсеттәр, мосолмандар өсөн изге урын, ошо Таштирмә лә, шулай уҡ сәхәбәләр ерләнгән ер - Нарыҫтау ҙа бар. 70 процент - тәбиғәт ҡомарткылары булһа, 30 процент тирәһен изге урындар алып тора. Ул маршрутты башлар өсөн, әлбиттә, халыҡты тәрбиәләргә, уларға мәғлүмәт еткерергә, тапшырыуҙар эшләргә кәрәк. Әммә быны башлап ебәреү бигүк еңел түгел, сөнки кеше осһоҙ хаҡҡа сит илгә барып ял итергә өйрәнгән. Шуға кеше аҡса түләй икән, ул лайыҡлы хеҙмәтләндереү алырға ла тейеш. Әгәр мәсьәләгә системалы ҡараш булһа, уны яйға һалырға мөмкин. Салауат Юлаевтың Таштирмәһе, уның йөрөгән эҙҙәре буйлап матур маршрут ойошторорға була. Мин уның тормошҡа ашырыуына ышанам. Күбеһенсә был үҙ халҡыбыҙ өсөн кәрәк. Улар шунда асылына, ғөрөф-ғәҙәтенә ҡайтып, рухи һәм тарихи хәтер яңыртасаҡ. Килгән туристарға инде ул башҡорт милләтенең бөтөн донъя тарихында ниндәй урын тотоп торғаның, күпме өлөш индергәнен иҫкәртеп торасаҡ. Күп илдәрҙә Ислам диненең һаҡланыуы - беҙҙең башҡорт халҡы биргән ҡорбандар хаҡы ул. Башҡорт халҡы донъя кимәлендәге тарихҡа ҙур өлөш индергән ҡәүем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

ФӘҺЕМ

# ИНЕРЕҢДӘН АЛДА...

**Беҙ, бер төркөм уҡыусы балалар, бер көн кинотеатрҙан ҡайтып килгәндә урамда Сәғит Агишты осраттыҡ.**

Күмәкләшеп: "Һаумыһығыҙ, Сәғит Агиш ағай!" - тип сәләмләнек. Бәләкәй генә буйлы, ҡаҡса һынлы олатай бер төркөм балаларҙың сәләмләүенә алсаҡ йылмайып: "Вәт, рәхмәт, балалар! Һаумын әле, һаумын! Ә һеҙ үҙегеҙ кем балалары?" - тип һораны. "Ә беҙ - 9-сы һанлы башҡорт мәктәбендә уҡыусы башҡорт балалары", - тип, бөтәбеҙ исеменән яуап бирҙе Әхмәт Янбулатов. Ә Сәғит Агиш: "Улай икән, һәйбәт, бик һәйбәт. Балалар, һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ һуң?" - тип һораны (бер төҫлө кейемдәребеҙгә иғтибар иткәндер инде). Шул уҡ ҡыйыу Әхмәт, урамыбыҙҙың исемен, йортобоҙҙоң һанын әйтер урынға, ниңәлер: "Ағай, беҙ "Башкирэнерго" янында йәшәйбеҙ", - тип яуапланы. Сәғит Агиш саҡ ҡына уйланып, өндәшмәй атлап килә бирҙе лә: "Һәйбәт, һәйбәт, "Башҡорт инер" тип йәшәйһегеҙ икән, балалар", - тине. Әхмәт ашығып: "Юҡ, ағай, "инер" түгел, "энерго", - тип төҙәтте. Ә яҙыусы ағайыбыҙ тағы ла ныҡышыбыраҡ: "Юҡ, "энерго" түгел, "инер", - тип шаяртты. Балаларға ҡушылып үҙе лә көлгән булды.

Саҡ ҡына тынып атланыҡ. Яҙыусы ағайыбыҙ: "Балаҡайҙар, шуны хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: башҡорт һәр ваҡыт инер алдынан нисек сығырын уйлаһын..." - тип әйтте лә, йылмайып һаубуллашып, К.Маркс урамына табан үҙ юлы менән китте. Ә беҙ Чернышевский урамы буйлап тура киттек. Сәғит Агиштың бик ҡыҙыҡлы повестар, хикәйәләр, ҙур романдар яҙыусы оҫта икәнен белә инек беҙ. Ә был яңы әйтелгән һүҙҙәр уйландырҙы, уйын ҡатыш әйтелһә лә, ниндәйҙер тәрән мәғәнә һалынғанын аңларға тырышып, тын ҡалдыҡ...

Сәғит Агиш ағайҙың шул йыраҡ йылдарҙа тороп ҡалған "Башҡорт инер" тигән һүҙҙәре тағы хәтерҙә ҡалҡып килеп сыҡты. Башҡорттоң "Инереңдән алда сығырыңды уйла", "Тауға менер алдынан нисек төшөрөңдө уйла" тигән мәҡәлдәре аша ниҙер әйтергә теләгәндер беҙгә ағайыбыҙ. Ул, бәлки, сәйәсәт хаҡында уйланған уйҙарының һығымтаһы һымаҡ та булғандыр. Бөгөнгә хәүефтәребеҙҙең, йәғни ерҙе, урмандарҙы, һыуҙарҙы һәм саф һауаны һатыу заманының яныңнан ҡабатланасағын да һиҙенгәндер инде Сәғит Агиш ағай. Башҡорт башына төшкән ямандар әленән-әле ҡабатлана тора бит. Сәғит ағайҙың әйткәндәренә һығымта яһап, ер-һыуыңды һатыуын һатырһың да ул - уның бик еңел эш. Ә бына ҡайтарып алыуы ауыр, хатта мөмкин дә булмаҫ (ҡулданҡулға һатылып, һәр бер һатыусы хаҡын арттырып һатырға тырыша бит), хәҡтар олигархтарҙың ғына аҡсаһы етерлек кимәлгә күтәрелер, тип тә уйланырға була бит бөгөн.

Әлбиттә, ябай халыҡ ҡатламы илебеҙ етәкселәренә бөтә өмөтөн бағлай. Улар һәр аҙымын "уйлап" баҫыр тип ышана. Ә Сәғит Агиш илебеҙҙең ҡанлы-шаңлы-данлы сал тарихын бик һәйбәт белгәнгә лә, беҙгә, балаларға, "Уйланһаҡсы" тип әйтеп ҡалдырғандыр инде баяғы һүҙҙәрен.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИКМӘКТЕҢ...
## көрпәлеһе файҙалыраҡ

■ Ҡытайҙа ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Унда 120 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙы тәҙрәһе булмаған бүлмәгә бикләгәндәр. Һынау мәлендә тәүҙә бүлмәнең утын һүндергәндәр, аҙаҡтан яндырғандар. Шулай уҡ уларға ҡурҡыныс һүрәттәр күрһәткәндәр һәм төрлө тауыштар тыңлатҡандар. Гүзәл заттарҙың ҡайһы осраҡта нығыраҡ ҡурҡыуын пульс йышлығы һәм тир бүленеү менән билдәләгәндәр. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар төндә бүлмәлә хатта ут янып торғанда ла ҡурҡа икән. Төндө кеше хәүефле мәл тип ҡабул итә һәм шуға ла һиҙгерлек һәм реакция көсәйә.

■ Кешенең тиреһендә унын нисек туҡланыуы асыҡ сағыла. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәҫәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙа күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары көрпәһенән таҙартылмаған ондан бешерелгән икмәктең файҙалы яҡтарын асыҡлаған. Ул ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеп, икенсе типтағы диабет үҫеше хәүефен юҡҡа сығара. Ҡара икмәк инсулинға реакцияны ла яҡшырта, ә аҡ икмәктең сәләмәт кешеләргә лә файҙаһы бөтөнләй юҡ тиерлек. Көрпәле икмәк метаболизмға яҡшы йоғонто яһай, шуға ла ул диабеттан һаҡлаусы иң яҡшы сара тип табылған. Икмәктең был төрө ябығырға теләүселәргә лә ярҙам итә. Көнөнә бер нисә киҫәк икмәк ауырлыҡты нормала тотасаҡ, организмдағы майҙарҙан да ҡотҡарасаҡ.

■ Бер ай дауамында бишәр кешенән торған ике төркөм һынау үткән: беренсе төркөм - сәй, икенсеһе ҡәһүә эскән. Һынауҙарҙың аҙағында ҡәһүә эсеүҙең әллә ни файҙаһы булмауы асыҡланған. Бынан тыш, ҡара сәйгә ҡарағанда, йәшел сәй яҡшыраҡ, тип раҫлай ғалимдар. Йәшел сәй ҡан тамырҙарын таҙарта, метаболизмды әүҙемләштерә, ул витаминдарға һәм антиоксиданттарға байыраҡ. Спортсылар йәшел сәйгә өҫтөнлөк биреүсән, сөнки ул зарарланған күҙәнәктәрҙе тергеҙә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығыта. Әйткәндәй, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре менән ауырыусылар аҡ сәскә, бөтнөк сәйҙәренә өҫтөнлөк бирһә лә була. Ҡәһүәләге кофеин күпкә тиҙерәк үҙләштерелә, шуға ла ике-өс тамсы ҡәһүәнән дә кеше үҙен яҡшыраҡ тоясаҡ. Әммә сәй кофеины организмдан оҙағыраҡ сығарыла. Ҡәһүә Альцгеймер ауырыуын иҫкәртә, майҙарҙы яндыра һәм асығыу тойғоһон баҫа.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# БЕҘҘЕҢ ЙӘНӘШӘЛӘ...
## ендәр ҙә йәшәй

**Һуңғы йылдарҙа һәр төрлө гәзит-журналдарҙа, телетапшырыуҙарҙа кешелек донъяһынан башҡа, беҙҙең күҙгә күренмәгән тағы ла ниндәйҙер "параллель" донъялар барлығы хаҡында фаразлауҙарҙы йыш ишетергә тура килә. Кемдеңдер ҡолағына ниҙер ишетелеп, икенселәрҙең күҙенә күренгеләп ҡалған сәйер нәмәләр әҙәм балаһын һәр саҡ бына ошондай уйҙарға этәрә, күрәһең.**

Бына шундай сетерекле һорауҙар килеп тыуғанда элегерәк яуапты "Маркҫҡа мөрәжәғәт итеп", йәғни, ғилми китаптарға таянып эҙләй инек. Хәҙерге көндө, әлхәмдүлиллаһ, беҙҙең бөтә ошо һорауҙарға дөрөҫ кенә яуап таба алыу мөмкинлегебеҙ бар. Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәре һис үҙгәрмәйәсәк Аллаһ Китабы - Ҡөрьән-Кәримгә һәм Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһис-сәләм Сөннәтенә таянһаҡ, һис яңылышмаҫбыҙ, иншаллаһ. Әҙәм балаһы үҙенең шәхси фекерҙәренә таянып, әллә күпме фаразлаһа ла, мәжүсилек заманынан күсеп, бөгөнгәсә һаҡланып килгән теләһә ниндәй юҡбарға ышанһа ла, Аллаһ китабынан, Бәйғәмбәрҙән уҙып китеп, нимәгәлер аныҡ яуап таба алмаясаҡ.

Һүҙҙе ендәрҙән башлайыҡ. Улар - ысынбарлыҡмы, әллә әҙәм балаһы уйлап сығарған һанһыҙ әкиәт геройҙарының береһеме? Яуап: ендәр бар! Тик улар параллель түгел, ә беҙҙең бына ошо яҡты донъяла йәшәй, тип уйларға кәрәк. Ендәрҙең барлығы Ҡөрьән аяттары һәм күп кенә Бәйғәмбәр хәҙистәре менән дәлилләнә. Изге Китапта һәр төрлө "донъялар" хаҡында түгел, ә Хоҙай Тәғәлә барлыҡҡа килтергән фәҡәт бер генә, хәҙерге көндә беҙ ғүмер иткән фани, йәғни, ваҡытлыса Донъя тураһында һөйләнә. Бынан тыш, беҙ мәңгелек Әхирәт хаҡында ла иҫкәртеләбеҙ. Әхирәтте "теге донъя" тип атаусылар ҙа бар. Ҡайһы берәүҙәр уны "ысын донъя" тип тә йөрөтә. Әммә беҙ уны Изге Ҡөрьән-Кәримдәге атама менән йөрөтөргә тейешбеҙ.

Ҡөрьән-Кәримдә "Ендәр" тип аталған сүрә лә бар. Унда бәғзе бер ендәрҙең Аллаһ Китабын ҡабул итеп, иман килтереүҙәре хаҡында әйтелә. Шулай уҡ "...кешеләрҙең ҡайһы берҙәре ендәрҙән ярҙам һоранылар, һәм бының менән уларҙың аҙғынлыҡтарын ғына арттырҙылар" (1-6 аяттар), тиелә (бында ендәрҙе Аллаһтан тыш илаһи көс тип танып, шуларға мөрәжәғәт итеүселәр хаҡында һүҙ бара тип аңлау кәрәк). "Елгәреүселәр" сүрәһендә (56-сы аят) Аллаһы Тәғәлә әйтә: "Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн генә барлыҡҡа килтерҙем". Ендәр ҙә, әҙәм балалары һымаҡ уҡ, Аллаһы Тәғәләнең мәхлүктәре (мәхлүк - ғәр. барлыҡҡа килтерелгән). Уларҙы ниндәйҙер берәй илаһи көскә эйә икән тип уйлау - ололарҙан-оло яңылышыу. Уттан барлыҡҡа килтерелгән был заттар кешеләрҙең күҙенә күренмәй, әммә үҙҙәре беҙҙе күрә. Уларҙың күреү һәм ишетеү һәләте беҙҙекенә ҡарағанда көслөрәк. Бынан тыш, ендәрҙең һиҙҙермәй генә кеше күңеленә үҫүәсә ҡылыу (шыбырлау, русса - нашептывать) һәләтлеге лә бар. Ислам динен ҡабул итеп алған, йәғни, иман килтергән (мосолман булған) ендәрҙең кешеләргә зыяны теймәй, тик кешеләрҙеке һымаҡ уҡ, уларҙың күҙҙәре тейеүе мөмкин. Әҙәм балаларына өйрәткән кеүек, ендәргә лә Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм динебеҙ ҡанундарын еткергән. Иман килтергән ендәрҙе Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм хатта беҙҙең дин ҡәрҙәштәребеҙ, тип атаған.

Ә бына Аллаһы Тәғәләгә иман килтермәгән, Уға баш эйеүҙән баш тартыусы, йәғни, кафыр ендәр - улар шайтандар, тип атала. Шайтандарҙың төп маҡсаты - әҙәм балаларын нисек тә булһа Аллаһ юлынан яҙҙырыу. Уларҙың башлығы - ҡәһәрләнгән Иблис үҙенең шайтандары ярҙамында Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәре ана шул әшәке эше менән булышасаҡ. "Өмөтһөҙ - шайтан", тигән һүҙбәйләнешен ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Эйе, шайтандар ысынлап та - өмөтһөҙ. Сөнки улар Аллаһы Тәғәлә тарафынан ләғнәтләнгән һәм Ҡиәмәт көнөндә мәңгелеккә йәһәннәм әһеле буласаҡ. Уларҙан айырмалы, һәр әҙәм балаһының үҙенең әжәле еткәнсегә ҡәҙәр Раббыбыҙға тәүбә ҡылып, иман килтереп, Уға буйһоноп йәшәп өлгөрөргә мөмкинлеге бар. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һәммәләребеҙ иманлы булып, Әхирәткә инеүгә өмөтөбөҙҙө өҙмәҫкә тейешбеҙ.

Ендәр хаҡында Бәйғәмбәребеҙҙең сәхих (достоверный) хәҙистәре күп. Уларҙың барыһы хаҡында ла бер юлы һөйләп бөтөп булмай, әммә берәүһе тирәһендә бер аҙ ғына туҡтап китеүҙе кәрәк тип таптым. Олораҡ кешеләрҙән ниндәйҙер берәй нәмәне, йәиһә кешене оҡшатып етмәгән осраҡта "уны енем һөймәй", тигән һүҙбәйләнеште ишеткеләгәнегеҙ барҙыр, моғайын. Кемдер берәүҙең ерле юҡҡа ғына ҡыҙып китеүен күреп, "ана, ене ҡотора башланы", тип тә әйтәләр. Элегерәк мин быға ғәжәпләнә инем, "Кешенең нимәнелер оҡшатмауында йәиһә, асыуланып, туҙынып китеүендә ен-

ФӘҺЕМ

# НӘФСЕ ҠОЛО БУЛМАҪ ӨСӨН...
## ваҡытында баш тарт

**Уҡыусы теориянан белеме өсөн Уҡытыусыһының хуплауын алғас, практик һынауҙар мәле башланған. Бик күп һынауҙар аша үтә Уҡыусы. Уҡытыусы был Уҡыусыһы өсөн нисәмә йылдар юҡҡа ғына көс түкмәгәнен күреп, бик ҡәнәғәт ҡала. Һуңғы һынау алдынан Уҡытыусы Уҡыусыһын был юлы һынауҙың асылын асмаясағы тураһында иҫкәртә. Уҡыусы проблеманы үҙе табырға һәм унан сығыу юлын да үҙе эҙләргә тейеш.**

Уҡытыусы әйтеүенсә, Уҡыусы икенсе бер илгә китергә һәм иртә таңдан беренсе булып таможня хакимы алдына барып баҫырға тейеш була. Был хакимдың шундай ғәҙәте була: иртән кем беренсе булып килә, ул уға һораған бер нәмәһен бүләк итә. Был илдең халҡы шул тиклем бай йәшәй, хакимға бына күп йылдар инде берәү ҙә беренсе булып килмәй. Уҡытыусы шулай ти: "Иртә таңдан унда бул. Хаким иртәнге намаҙҙан һуң баҡсаһына сыға. Хаким һинән теләктәрең тураһында һорағас, унан ни теләйһең, шуны һора".

Уҡыусы, әлбиттә, Уҡытыусыһының һуңғы һынауын аңлап етмәй. Шулай ҙа юлға сыға һәм бер нисә көндән иртән иртүк хаким йөрөй торған баҡсала була. Ҡояш күтәрелә башлау менән баҡсаға хаким да сыға. Ул йәш кешене күреп, бик ҡыуана һәм: "Рәхим ит. Һин ниҙер һорарға теләйһеңме? Һора, ни һораһаң - шуны бирермен", - ти.

Йәш кеше юғалып ҡала. Уның шул тиклем теләктәре күп. Теләктәр уның ҡолаҡ төбөндә бал ҡорттары кеүек гөжләй башлай хатта. Ул ярлы ғаиләлә тыуа, ғүмер буйы мәхрүмлектә ыҙа сигә. Ә бында еңел генә байығыу мөмкинлеге тәҡдим итәләр. Егет шулай ҙа ышанмайынсараҡ хакимдан һорай ҡуя: "Ә һеҙ барыһын да бирәм, тигән саҡта нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ?"

Хаким шатланып яуап бирә: "Ни теләйһең, шуны бирәм. Батшалығымды һораһаң, батшалығымды, бар аҡсамды һораһаң, ҡаҙнамда күпме аҡсам бар - барыһын да һиңә бирәм".

Йәш кеше уйға ҡалған: "Бәлки, унан ун алтын һорарғалыр?.. Ә ниңә унды ғына, бәлки, ул йөҙ алтын һораһаң да бирер?..". Егеттең эсендә дауыл башлана. Теләктәре тулҡын-тулҡын булып ярға бәрелә, бына-бына көслө дауыл башланыр кеүек. Ниндәй генә теләгендә туҡталырға уйлаһа ла, уны тағы ҙурырағы баҫып китә.

Егетте диҡҡәт менән күҙәткән хаким былай ти: "Күрәм, һин ниҙер һорарға әҙер түгелһең. Мин баҡсам буйлап йөрөп киләйем, сәскәләремде ҡарайым, мин әйләнеп килеүгә һин ниндәйҙер ҡарарың тураһында миңә хәбәр итерһең".

Егет өсөн ысын ғазап башланған. Ул был проблеманы үҙе эҙләп табыуын аңлаған. Хәҙер уны хәл итергә кәрәк. "Мин хакимдан барыһын да һорай алам, тик ни һораһам да, хакимдыҡынан аҙыраҡ буласаҡ. Шуға ла мин унан бар байлығын биреүен һорайым".

Шундай ҡарарға килә егет һәм баҡса буйлап йөрөүҙән кинәнес алып, шат йөҙ менән янына килгән хакимға былай ти: "О, бөйөк хаким, һеҙ миңә нимәгеҙ бар, барыһын да

✓ *Янындағы бына шул шайтандың яуызлыҡтары зыян итмәһен өсөн Аллаһ илсеһе әҙәм балаларына һәр саҡ - өйгә инер алдынан, ашарға ултырғас, йоҡларға ятырҙан алда "бисмиллаһ" әйтергә ҡушҡан.*

дең ни ҡыҫылышы бар икән?" тип уйлай инем. Шул һүҙҙәрҙең ҡайҙан килеп сыҡҡанын аңламаған көйө үҙем дә автоматик рәүештә был һүҙбәйләнештәрҙе ошо көнгәсә ҡуллана килдем... Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм хәҙистәрен, динебеҙҙе ентекләберәк өйрәнеү процесында тап ошо хаҡта ифрат та мөһим нәмә асыҡланым. Ата-бабаларыбыҙ юҡҡа ғына енде һәр саҡ телгә алмаған икән: һәр кешегә беркетелеп ҡуйылған ен барлығы хаҡында Аллаһ илсеһенән риүәйәт (сәхих хәҙис) бар. Тап ана шул хаҡта, йәғни, һәммәбеҙ янында ен йөрөгәнлеге тураһында белгән боронғолар. Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтеүенсә, был ендәр - шайтан, йәғни кафыр ендәр. Уларҙың төп маҡсаты - фәҡәт әҙәм балаларын имандан яҙҙырыу. Кеше күңеленә үәсүәсә ҡылып, тик Аллаһ юлынан ситкә алып китеү яғын ҡарай улар. Бер мәл хәҙрәти Ғәйшә буштан-бушҡа ғына хәләл ефетенә, йәғни Бәйғәмбәргә (с.ғ.с.) ҡарата асыулы хәлдә була. Быға үҙе лә аптырап, Аллаһ илсеһенә ошо хаҡта хәбәр итә. Бәйғәмбәр уға бер кешенең дә енһеҙ булмауы һәм ул ендең шайтандарҙан булып, кешегә "ҡотҡо" биреү һәләте барлығы хаҡында әйтә. "Һинең янында ла ен бармы?" тип һорай Ғәйшә. "Эйе, - тип яуаплай Рәсүлуллаһ, - тик минең янымдағы ен Аллаһы Тәғәлә ихтыяры менән Ислам динен ҡабул итеп алды һәм ул мосолмандарҙан. Миңә ул һис зыян килтермәй".

Ысынлап та, бәғзе ваҡыт кеше буштан-бушҡа ғына ҡыҙып китә, теге йәки был яҡынына асыулы һүҙҙәр әйтеп ташлай. Әммә, күпмелер ваҡыттан, аҡылына килеп, һалҡын баш менән уйланып алғас, быға үкенә. Икенсе миҫал. Берәү икенсе кешене мәсеткә йөрөргә өгөтләй, ти, әммә әлеге шайтан кешенең күкрәгенә хисапһыҙ һылтауҙар "һеңдерә" башлай: "Һин - эш кешеһе, һинең ваҡытың юҡ. Эшеңдә директор ни әйтер? Башҡалар быны нисек ҡабул итер?" йәиһә, "Һин әле йәш, был донъяла теттереп йәшәп ҡалырға тейешһең, ә әхирәт - әллә бар, әллә юҡ нәмә..." ти ул. Бына ни өсөн беҙҙең ата-бабаларыбыҙ күңелгә шундай-бындай уйҙар килә башлау менән: "Әғүҙү билләһи минәш-шәйтәнир-рәжим" (ләғнәтләнгән шайтандан Аллаһҡа һыйынам), тип, һул яғына ҡарап өс мәртәбә төкөрөр булған (тик ағасҡа һуғып түгел). Шайтандың үәсүәсәһен тыңламау маҡсатында тап ана шулай тип әйтергә Аллаһ илсеһе өйрәткән хәҙис бар.

Шайтан хатта намаҙ уҡыусы кешенең намаҙы менән йөрәге араһына инеп, уны яңылыштырыусан. Фәҡәт үҙенең намаҙы хаҡында ғына уйлап, уға бирелеп атҡарырға тейеш кеше был ғибәҙәтен. Бәйғәмбәр әйтеүенә ярашлы, намаҙ мәлендә шайтан кешегә "һин бына шуны, йә быны иҫлә", тип, һәр төрлө донъяуи шаҡы-шоҡо уйҙарҙы башҡа индерә. Шунлыҡтан, ғүмер буйы биш намаҙ уҡып йөрөгән кеше лә ҡайһы берҙә яңылышып китә. Бындай осраҡтарҙа намаҙ ваҡытында ла Бәйғәмбәр "Әғүҙү билләһи минәш-шәйтәнир-рәжим" тип, енде ҡыуып ебәрергә ҡушҡан. Эйе, ныҡлы иманлы кешеләрҙе яңылыштырыу шайтан өсөн әллә ни еңелдән түгел. Әммә кешенең иманы ни тиклем нығыраҡ булһа, шайтан да мәкерләнә бара. Мәҫәлән, кемдер хаҡында ғәйбәт һөйләргә, рибаға, йәғни процентҡа аҡса алырға, отош (лотерея) уйындарына "ҡыҙыҡлау" юлы менән кемделер (хатта күптәрҙе) тура юлдан яҙлыҡтырыуға өлгәшә. Янындағы бына шул шайтандың яуызлыҡтары зыян итмәһен өсөн Аллаһ илсеһе әҙәм балаларына һәр саҡ - өйгә инер алдынан, ашарға ултырғас, йоҡларға ятырҙан алда "бисмиллаһ" әйтергә, йоҡларға сисенерҙән алда шайтандың күҙе теймәһен өсөн "Күрси" аятын, "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләрен уҡырға ҡушҡан. Бәғзе береүҙәр ен, шайтан, тигән нәмә буш һүҙ, йәғни, уйлап сығарылған әкиәт, тип яңылыша. Бындай яңылышыу - ифрат та ҡурҡыныс, сөнки, изге Ҡөрьән-Кәримдәге Аллаһ һүҙҙәрен һәм Бәйғәмбәр хәҙистәрен инҡар итеү, Аллаһы Тәғәлә "бар" тип әйткәнде "юҡ", тип иҫбатларға маташыу - ололарҙан-оло гонаһ. Башҡа һәр тереклектән айырмалы, кешеләр һымаҡ уҡ, ендәр ҙә аҡыллы йән эйәләре. Улар ҙа үҙҙәренең йәшәү дәүерендә ҡылған эштәре өсөн әхирәттә кешеләр һымаҡ уҡ Аллаһ алдында яуап бирәсәк. Был заттар кеше йәшәмәгән ташландыҡ өйҙәрҙе, мунса, мөғәрәптәрҙе үҙҙәренә төйәк итеүсән, ҡыйлыҡҡа ташланған, кешенән ҡалған аҙыҡ-түлек менән туҡланыусан. Ә кеше янында йөрөгәндәренең "бисмиллаһ" әйтмәй ашаған кеше менән бергә ашауы хаҡында әйткән Аллаһ илсеһе. Йәғни, Аллаһты иҫкә алмай ашаған кеше үҙенең янындағы шайтанды ла туйындыра.

Кешеләрҙе Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм тыйған һәр төрлө им-томсоларға, күрәҙәселәргә этәреүсе булып та тап ана шул шайтандар тора. Бер мәл Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм беләгенә еп бәйләгән берәүҙе күреп ҡала ла, унан был хаҡта һорай. Теге кеше үҙенең күҙе ауыртҡанлығы, унан им-томсоға күренгәс, тегеһе ҡулына еп бәйләргә ҡушыуы хаҡында һөйләп бирә. "...Еп бәйләгәс тә, күҙемдең ауыртыуы бөттө", - ти. Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм уға: "Һин әлеге им-томсоға барып, еп бәйләткәнгә тиклем, шайтан һинең күҙеңә төртөп ауырттырып торҙо. Һин беләгеңә еп бәйләткәс тә, ул күҙеңә төртөүенән туҡтаны..." - ти. Йәғни, теге кеше үҙенә һаулыҡ һорап Аллаһ Тәғәләгә һыйыныр урынға, ниндәйҙер бер им-томсоноң (хатта ептең дә!) "илаһи көс"өнә ышанһын өсөн, шайтан ана шул хәйләле ысулын ҡулланды һәм уны бик еңел генә юлдан аҙаштырҙы.

